ЙЫҺАТ СОЛТАНОВ

ХАЖИӘХМӘТ УНАСОВ



КАНЛЫ ЙЫЛДАР

Йыһат Солтанов

ХАЖИӘХМӘТ УНАСОВ

ҠАНЛЫ ЙЫЛДАР
1920 – 1921

Башҡортостан баҡсаһы –
Арыҫландар торған ер;
Арыҫландар бабаһы –
Ҡаһармандар йөрөгән ер;
Ҡаһармандар кәүҙәһен
Ҡосаҡлаған, күмгән ер;
Хәләл ҡандар шәүләһен
Күккә тәрсим ҡылған ер!
Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ.
Таптайым тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.
Башҡортостан йәшәһен,
Сөнбөлстан йәшәһен.
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Арыҫландар йәшәһен!

Шәйехзада Бабич

Сибай -- 2011

Халҡыбыҙҙың ғәзиз батырҙары тураһындағы был баҫманы донъяға сығарышыуҙа хәләл иғәнәләре менән ярҙам иткән игелекле уҙамандарыбыҙға, арымай-талмай шул эште ойоштороусы Тәлғәт Әхтәм улы Солтановҡа оло рәхмәтемде белдерәм.

Автор

Солтанов Й.
Хажиәхмәт Унасов. Ҡанлы йылдар.
Сибай.

УНАСОВ Хажиахмет Габидуллович [07.11.1887. д. Баиш 1-ой Бурзянской волости Орского у. Оренб. губернии (Ишмухаметовский с/с Баймакского р-на РБ) – 17.01.1921. хутор Такахуккан того же р-на], народный герой командир 1-ой дивизии Повстанческой Красной Армии (2-ой дивизией командовал Магасумов Ф.Б.) в период Башкирской национально-освободительной войны (1920-21 г.г.) под руководством Мурзабулатова С.Ш. Участник Первой мировой и Гражд. войн, служил каптенармусом в башкирской белой армии А.-З. Валидова. Летом 1920 г. по ложному обвинению в конокрадстве был арестован властями Бурзян-Тангаурского кантона (Худайбердин Ш., Насиров А.), убежал из заключения и, сколотив вооруженный отряд из семи человек, стал громить местные партъячейки и советские органы, что было началом всенародного, охватившего одиннадцать из тринадцати кантонов республики, вооруженного восстания за свержение кровавой диктатуры Г.К. Шамигулова, ставленника

большевистской Москвы. Жестокие карательные меры против восставших не приносили успеха и антибашкирское руководство республики при непосредственном участии чрезвычайного уполномоченного ЦК РКП(б) и ВЦИК РСФСР П.Н. Мостовенко вынуждено было начать мирные переговоры с восставшими. 27 ноября в с. Темяс было подписано мирное соглашение с большими уступками со стороны властей.

Краткая родословная Х.Г. Унасова: род (предположительно) Усерган, ара (подразделение) Бүреләр (Волки), шежере: 1. Мухарлям. – 2. Унас, 1760 г.р. – 3. Губайдулла. – 4. Габидулла. – 5. Хажиахмет, 1887 г.р., его младший брат Даут, Даута сын Абдулла, его сын Зайнитдин...

БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

Хажиәхмәт батыр

С.Ш.Мырҙабулатов

1920 йылда Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов етәкселегендәге ихтилалды әгәр Башҡортостанды ялмаған янғынға тиңләһәк, уны дөрләтеүсе тәүге оҫкон, моғайын, Хажиәхмәт Ғәбиҙулла улы Унасов[1] болаһы булалыр. Шул бөйөк ихтилал арҡаһында ла инде башҡорт халҡы үҙенең милли йөҙөн, автономиялы Башҡортостан республикаһы рәүешендәге үҙ дәүләтселлеген, ер йөҙөндә үҙ еренең аҫаба-хужаһы булып йәшәү хоҡуғын мәңгелеккә юҡ ителеүҙән ҡурсалап ҡала алды, шуның менән бөгөнгө Башҡортостан Республикаһының булмышын һәм

[1] Унасов – ҡабул ителгән яҙылышында бирелә, ә башҡортса дөрөҫө Өнәсев булһа кәрәк.

яҙмышын тәьмин итте. Большевистик идеология аппараты был ҡораллы халыҡ көрәшен үҙенең 70 йыллыҡ хакмилыҡ ҡылыу осоронда телгә алыуҙан тыйып та, әһәмиәтен кесерәйтеп күрһәтеп тә, ҡатнашсыларын «бандит», «ат ҡарағы», «дезертир», «контрреволюционер», «халыҡ дошманы» кеүек ҡара тамғалар менән хурлап та килгәнлектән, әүәлерәк партияның үҙе тарафынан уҡ, *башҡорт халҡының милли-азатлыҡ хәрәкәте*, тип танылған (һәм аҙаҡ шул баһаһы йәшерелгән) ул ҡораллы күтәрелештең үҙе лә, уның батырҙары ла быуындарҙың хәтеренән аҙлап-аҙлап юйылып ҡалыу ҡурҡынысын кисерҙе. Халыҡ бәхете өсөн дәһшәтле алышта ғәзиз баштарын һалған изге шәһиттәрҙән Хажиәхмәт батыр кеүек арҙаҡлы ирҙең дә исеменә большевистик пропаганда көсләп йәбештергән баяғы «ат ҡарағы» тигән уйҙырма-яла ла уның асылын белмәгәндәрҙе ошоғаса аймылыш ҡылып килә бирә бит (батырҙың хатта элекке ауылдаштары ла уны «бандит» тип кенә белгән). Шуға күрә лә бында һүҙҙе Башҡортостанда советтар хакимиәте урынлашыуҙың икенсе йылында уҡ башҡорт халҡын ҡулына ҡабат ҡорал алырға мәжбүр ҡылған сәбәптәрҙе ҡыҫҡаса ғына барлауҙан башларға кәрәк.

Төп сәбәп — Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң да ҡан эскес Рәсәй империяһының ғәмәлдә емерелмәй шул көйөнсә ҡалыуында, фәҡәт төҫөн генә алмаштырыуында, йәғни «аҡ батша» төҫөнән «ҡыҙыл пролетариат диктатураһы» төҫөнә генә әүерелешендә, ә үҙенең империализм есемен, ҡылыҡтарын иһә һаман да шул бер килеш һаҡлауында ине, әлбиттә (хәҙерге бәғзе бер «демократ»тар ҙа аслан шул уҡ империяны ҡыҙыл төҫтән ала-ҡола төҫкә алмаштырып ҡурсалағаны кеүек). Дөрөҫ, революцияның тәүге көндәрендә үк большевиктар, «Рәсәй халыҡтарының хоҡуҡтары Декларацияһы»н ғәләмгә иғлан ҡылып, Рәсәй империяһы тигән «халыҡтар төрмәһе»нең (В.И. Ленин билдәләүе) емерелеүен — «Рәсәй халыҡтарының империя ҡыҫаһынан айырылып сығыуға һәм үҙ аллы дәүләт төҙөүгә тиклем ирекле

үҙ билдәләнешкә хоҡуғы»н һөрәнләп таныны, тик был фәҡәт күҙ буяу, быуаттар буйына иҙелеп азатлыҡҡа һәм үҙ аллылыҡҡа сарсаған урыҫ түгел халыҡтарҙы ҡыҙыу мәлендә большевиктар яғына тиҙерәк ауҙарыу, уларҙың йәндәрен һәм ҡандарын, аҫтыртын сәйәси рәүештә, большевиктар етәкләмеш ҡыҙыл империя мәнфәғәттәрендә файҙаланып ҡалыу өсөн эшләнде. Сөнки «ирекле үҙ билдәләнеш» тураһындағы шапырыныу — ваҡытлыса ғына алдатҡыс сара, хәйләкәр балыҡсының ҡармаҡ осона элмеш улъяһы ине. Әммә яугир башҡорт халҡы ул улъяны, хәйләкәр балыҡсы һис кенә лә көтмәгәнсә, ҡармағынан айырым ҡарпып йотто — ҡағыҙҙа түгел, ғәмәлдә үҙ аллы (ерле автономиялы) дәүләтен дәррәү ҡороргa, дәүләтселлегенең төп нигеҙен — *ҡораллы милли ғәскәрен* булдырырға кереште. Кинәт һиҫкәнмеш ҡыҙыл империя үҙенә кәрәкһеҙ был дәүләтселлектең башына тиҙ генә етергә лә ҡотолорға яҫҡанғас, башҡорт халҡы шул арала үҙенең дәррәү төҙөп өлгөрткән регуляр армияһы (!) менән тарих майҙанына ғәмәли дәһшәтле көс рәүешендә дөрөп сыҡты, шул арҡала Рәсәй советтар хөкүмәтен империя олононан ярып сығып ботаҡланмыш автономиялы Башҡортостан республикаһын танырға мәжбүр итте. Ләкин ҡыҙыл империяның әмәлһеҙҙән, сараһы юҡ көндән генә таныуы ине был; шуға күрә лә ул тәүге көндәрҙән, хатта 1919 йылдың мартында ике-ара Килешеү һөҙөмтәһендә башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына сыҡҡан тәүге сәғәттәренән үк, башҡорттоң ҡан даръялары түгеп яулаған, йәндәй күргән ғәзиз үҙ аллылығын бөтөрөү маҡсатында автономиясы башҡорттарға ҡаршы һыҡралы ҡара мәкер, ҡанлы террор башлап ебәрҙе (Башҡортостанға Мәскәү килтереп ҡуйған Шәмиғолов – Мансырев диктатураһы, Поленов, Руденко һ.б. коммунистик ҡырғын әтрәттәре), был оторолоҡ артабан да бер генә мәлгә лә туҡталманы, фәҡәт алымдарын ғына үҙгәртеп төрлөләнде. Сөнки бығаса Рәсәй тарихында булмаған, башҡа халыҡтарға ла өлгө күрһәткән автономиялы Башҡортостан республикаһы — мәңге йәшәргә тейешле тип һаналған ҡыҙыл империя

тәнендәге һыҙлатҡыс шырау ине, нисек тә шуны һурып алып ташларға кәрәк ине. Автономиялы йәш республиканың тәүге ике йыл ғүмере ана шул «һурып ташлау»ға киҙәнмеш *бөйөк державасылыҡ* золомо аҫтында үҙ йөҙөн һаҡлап йәшәү өсөн аяныслы-ҡырҡыу көрәшеп уҙҙы.

Донъяны «яңыса» төҙөүсе В.И.Ленин, «капитализмдың иң юғары стадияһы булған империализм» осоронда Бөйөк Британия кеүек метрополияларҙың Һиндостандай колонияларын ни рәүешле рәхимһеҙ талауҙары тураһында фашлаусы китаптар яҙһа ла, үҙе етәкләгән советтар Рәсәйенең урыҫ булмаған халыҡтар йәшәмеш төбәктәрен ғәмәлдә үҙенең ҡыҙыл империяһының колониялары итеп һананы, Үҙәк Рәсәй файҙаһына уларҙың елек майҙарын күберәк һурырға, ҡандарын да мулыраҡ эсергә тырышты. Шундай танһыҡ төбәктәрҙең береһе — мәғдәндәргә һәм игенгә бай Урал, башҡорт ерҙәре ине. 1918 йылдың йәйендә ошо Ленин ләҡәпле алыпйән, мәҫәлән, үҙенең «революция бишеге»нән ажарлы һөрән һалды: «Питер эшселәре... тиҫтәләрсә меңәрләгән һандарҙа ҡуҙғалырға ла икмәк күп булған, үҙеңде лә, ғаиләңде лә туйҙырырлыҡ Уралға, Иҙел буйына һәм Көньяҡҡа ябырылырға тейеш» (В.И. Ленин. Әҫәрҙәренең тулы йыйылмаһы, 36-сы том, 521 — 522-нсе биттәр). Бар ҙа тала, йәндәрен алып тала, тигән һүҙ түгелме ни?!.

1918 — 1919 йылдарҙа дәһшәтле фронт, бер түгел, ике тапҡыр иңенән көйҙөрөп үтеп, аҡтар тарафынан да, ҡыҙылдар тарафынан да ҡаҡҡа таяндыртып таланған, бөлдөрөлгән Башҡортостанды (600 ауыл яндырылған, 200 мең кеше йорт-ҡаралтыһыҙ, кейем-һалымһыҙ, аҙыҡ-түлекһеҙ ҡалған) Рәсәй совет хөкүмәтенең баяғылай Ленин бойороғо буйынса һөсләтелгән ҡораллы коммунистик әтрәттәре, продәтрәттәре ҡануни рәүештә өйберенсә йөрөп талай (продразверстка үткәрә). Большевистик матбуғат үҙе йәшермәй таныуынса, 1919 — 1920 йылғы «әҙерләү» осоронда сикһеҙ фәкирлек кисермеш Бәләкәй Башҡортостандан ҡыҙыл Рәсәй ҡаҙнаһына 1,6 миллион бот иген, 78,8 мең бот ит, шуларҙан тыш йәнә 27 мең

баш мөгөҙлө эре мал, 6,5 мең баш вағ мал ҡырсып алынған. Башҡорт халҡын себендәй ҡырған 1920 — 1921 йылғы ҡот осорғос аслығтағы «әҙерләү» осоронда иһә, иген баҫыуҙары ҡоролоҡтан тамам көйөп ҡалыуға ла ҡарамаҫтан, астан шешенгән халыҡтан 2,2 миллион бот иген, 39 мең баш мөгөҙлө эре мал, 82 мең баш вағ мал, 6,2 мең бот май, 2,2 мең бот бал тейәп оҙатыла Үҙәк Рәсәйгә. Өҫтәүенә, 1920 йылдың октябрендә, В.И. Лениндың шәхсән үҙ ымы буйынса, Көнбайыш фронтҡа өҫтәлмә рәүештә йәнә 52 мең бот һоло, 100 мең бот бесән, 600 баш мөгөҙлө эре мал һәм Мәскәүҙең айырым үҙенә генә (Кремль даһиҙары табыныналыр) 50 мең бот он, 150 мең дана йомортҡа «бүләге» ебәрелә. Ошо 1920 йылғы үкертеп талау һөҙөмтәһендә Башҡортостан аҡтыҡ хәленән тайып, 1921 йылдың яҙында уҡ ауылдарҙа баяғы тоташ аслыҡ ғәрәсәте башлана. Ғәрәсәтте үҙ ҡулдары менән булдырыуҙа Башҡортостанға түрә итеп юлландырылған Мәскәү вәкилдәре ең һыҙғанып эшләй: Башҡортостан республикаһының Наркомземы П.Г.Банатов һәм Наркомпроды А.И.Кирилев иптәштәр улар. Урындағы урыҫ шовинистары менән бер төптән, ҡулға-ҡул тотошоп, үҙәкләштерелгән ысул менән республиканың ауыл хужалығын емерә был бәндәләр. Әйтәйек, Банатов, түшәмдән алынған һандар менән төрлө фокустар яһап, сәселмәгән ерҙе — сәселде тип, алынмаған уңышты — алынды тип, йәнәһе башҡорт йорттарының келәт бураларын һығылдырыусы тиҫтәләгән миллион бот иген, ҡураларында мыжғыусы иҫәпһеҙ-хисапһыҙ күп мал-тыуар «артыҡ»тарын («излишки») рәсми хисапнамәләренә теркәп, шул «излишки»ҙарҙың көллөһөн кисекмәҫтән көрәп алып дәүләт ҡаҙнаһына оҙатыу тейешлеген нигеҙләй. Әшнәһе Кирилев иһә, коллегаһы әтмәләгән шул «ышаныслы» статистика мәғлүмәттәрен йәне теләгәнсә уғата үҫтереп, башҡорт ауылдарын *ҡораллы продәтрәттәр* ебәреп талауҙы, асылында башҡорт тамырын ҡоротоуҙы еренә еткереп ойоштора.

Аянысли был ваҡиғалар башҡорттоң Ә. Вәлидов етәкселегендәге үҙ «буржуаз башҡорт хөкүмәте» осоронда

барғанлығын да онотмайық; ә ул хөкүмәт Мәскәүҙең баяғы империя ҡыҫымына сыҙай алмай вазифаларын ҡалдырып киткәндән һуң, урынына Мәскәүҙән ебәрелмеш баяғы яуыз Шәмиғолов диктатураһы ҡарпығас, тамам бөлдөрөлгән башҡорт халҡының асығтан-асыҡ ҡанын ҡойоу башлана, «большевистик яңы хөкүмәт» пуля һәм ҡылыс теле менән генә һөйләшә...

Был осорҙа Хажиәхмәт Ғәбиҙулла[2] улы Унасов ҡайҙа һәм кем булған һуң? Иген үҫтереүсе ябай ерекмән, мал аҫыраусы ябай көтөүсе — үҙенең Байыш ауылында хәләл көсө менән көн күреүсе, әлбиттә. Ил кисергәнде кисереп, коммунистар хакимиәтенең бөтә йәбер-золомдарын үҙ башынан үткәреүсе. Ул ваҡытта баш күтәреп ҡулына ҡорал алырға, бәлки, уйламағандыр ҙа ул. Әммә заманалар заңы ҡотолғоһоҙ шул юлға этәрә уны.

Рәсәй совет хөкүмәтенең, Башҡортостан автономияһы тураһындағы ике-ара Килешеүҙе үҙенең 1920 йыл 19 май ҡарары менән тупаҫ боҙоп, автономиянан гөбөрнә (губерния) яһарға юҫыҡланыуы, шуны тиҙләтмәккә автономияның хас дошманы Ғ.К. Шәмиғоловты Башҡортостандың хакимиәт башына килтереп ҡуйыуы бындағы бөйөк империясылыҡ сәйәсәтенең юғары нөктәһе була һәм сыҙамлы башҡорт халҡының аҡтыҡ хәлен, сабырлығын ҡаҡшата. Бөтә Башҡортостан, башҡорт халҡы, Мәскәүҙең В.И.Ленин ҡул ҡуйған шул ҡәһәрле 19 май ҡарары артынса уҡ, умартаһының кейәһенә таяҡ тығып болғатылған оло күстәй, болара башлағайны. Башҡортостан автономияһын ҡан-дошманы һанаусы колонизатор-килмешәктәр ҙә йоҡлап ятмай — шул ҡарарҙан рухланып, һәр урында башҡорт ерҙәрен баҫып алып үҙләштереүҙәрен киң ҡоласлы йәйелдерә, урыҫ ауылдары күрше башҡорт ауылдарына хөсөтлөктәрен ишәйтә. Күпселек башҡорт ғаиләләренең ир-атттары был осорҙа ҡыҙыл әрмис

---

[2] Батырҙың атаһының исемен һәм 1887 йылдың 7 ноябрендә тыуғанлығын тарихсы М.М.Маннапов асыҡланы.

булып ҡыҙыл фронттарҙа большевиктар файҙаһына ҡан ҡойоп йөрөгәнлеге йәки үлеп ҡалғанлығы арҡаһында әмәлһеҙҙән һөрөлмәй ятҡан, йәки ҡортомға (арендаға) бирелгән аҫаба ерҙәрен килмешәктәр, көс менән баҫып алып, үҙләштерә башлайҙар (Рәсәй совет хөкүмәтенең шуға юл ҡуйыусы ҡануны була); шул ерҙәрҙә төҙөлгән коммуна, колхоз йәки башҡа артелдәрҙең *ҡоралланған* төркөмдәре айҡай илде, ҡарышҡан башҡорттарҙы урынында уҡ атып үлтерә. Золомдо золом тыуҙырып, талаш-тартыш орлоҡтары ябай көнкүреш кимәлендә лә киң тарала, милли төҫ ала башлай. Мәҫәлән, «Түбәнең урыҫ эшселәре менән Басай ауылы ерекмәндәре араһында Ирәндек буйындағы бесәнлек ере өсөн талаш-ыҙғыштар булып ала» (Сибайҙағы «Атайсал» гәзитенең 1993 йыл 7 август һаны). Бөрйән-Түңгәүер кантонының Байыш ауылы ла шундай бәләгә тарый: күрше Сарыбильский (элекке Йылайыр совхоз-техникумы биләмәһе) урыҫтары, еребеҙгә керҙе, тип һылтаулап, Байыш ауылының тибенлектә йөрөгән йылҡы өйөрөн ҡыуып алып китә лә кәртәләренә бикләп ҡуя. Байыштар быны күрәләтә ҡылынған һөмһөҙлөк һанай. Тәбиғәте буйынса ҡыйыу яугир, ғәҙелһеҙлекте күтәрә алмаҫ ғәйәр йән — баяғы Хажиәхмәт Унасов тигән дыуамал ир арыҫланы күҙ йомоп ҡала алмай (халыҡ араһында әлегәсә уның ҡуш йөрәклелеге, саялығы хаҡында риүәйәттәр бар). Вәлидовсылар хәрәкәтенең әүҙем ҡатнашсыһы, ә һуңынан билдәле совет эшмәкәре һәм Башҡортостандың шул заман тарихсыһы Н.Р. Бикбаев тәүәрихнамәһе буйынса, Хажиәхмәт Унасов был ваҡытта инде армия һәм һуғыш тәжрибәһен үткән уҙаман булырға тейеш. Бәгзеләрҙең «ҡара наҙан» тигәндәре лә ышандырмай — Әхмәтзәки Вәлидовтың аҡ армияһында каптенармус булып хеҙмәт иткән бит (уҡый-яҙа белмәгәнде унда ҡуймаҫтар ине). Һәм йәнә: «Унасовтың үҙен күреп белгән уҡытыусы Ш. Мостафин былай тип һөйләгәйне: «Көслө көрәшсе ине ул, атта һыбай оҫта йөрөнө, халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлаусы кеше булды», — тип әйтелә баяғы «Атайсал»да. Бына шул ярһыу уҙаман, бер-нисә иптәше менән кисен

Сарыбильскийға барып, ауылдарының баяғы әллә нисә көн буйына бикле торған йылҡы өйөрөн сығарып ала; шул ығы-зығыла бер-ике баш урыҫ аты ла ҡушылып китә өйөргә. Ошоға бәйле «ат ҡарағы» тураһындағы ғауға кантон милицияһына еткерелә. Эшкә ситтән ебәрелмеш һәм урындағы тормошто белмәүсе милиция башлығы А.С. Насиров, тикшереп тә тормайынса, урыҫтар ялаһы буйынса «ат ҡарағы» рәүешендә Хажиәхмәт Унасовты ҡулға алып, ябай ағас өйҙән ҡулайлаштырылған Темәс төрмәһенә шартлатып бикләп тә ҡуя — «ат ҡарағы» тигән ярлыҡ Унасовҡа шулай йәбештерелә. Әммә төрмәлә ултырып сыҙамай батыр — бура мөйөшөн күтәреп сығып ҡаса, ултырҙаштарын һәм ҡораллы милиционерҙы ла эйәртә. Һемәйеп ҡалған милиция башлығы Насиров һәм кантревком рәйесе булған иптәштәр артабан, үҙ абруйҙарын төшөрмәү йәһәтенән, яуыз «ат ҡарағы» тураһындағы уйҙырманы ҡабартып, үҙҙәре яҙған рәсми ҡағыҙҙарҙа ҡурпыта, шулар аша ул матбуғатҡа, тарихҡа барып керә лә ҡыҙыл империяның өгөт-нәсихәт аппараты был яланы быуындан-быуынға тәкрарлай. Заманында хөрмәтле пенсионер (элекке комсомол түрәһе, партия әүҙемәне) И. Мотаев тигән уҙаман да бит, шул ҡалыптан ауаздаш: «Урыҫтар уны «Хужахмет бандит» тип кенә йөрөттөләр, ә башҡорттар «ат ҡарағы» тинеләр һәм иң дөрөҫө лә шулай ине... Бындай бәндә ниндәй сәйәсәт аңлап, мин — үҙ башҡорттарым өсөн көрәшеүсе, тип йөрөһөн инде», — тип, уйындан уймаҡ сығармаҡсы («Атайсал»дың 1994 йыл 5 май һаны). Уның «ат ҡарағы» икәнлеген дөрөҫләүсе тиҫтәгә яҡын «аҡһаҡал»дың Мотаев үҙе «ауылдан ауылға йөрөп йыйған» исемлеге лә килтерелә. Бигерәк тә элек Хажиәхмәт Унасовтың ҡатыны булған меҫкенкәй Кәримәнең, заманында (1932 йылда) баяғы идеялы-ғәйәр комсомолец И.Мотаевтың ныҡыуы буйынсалыр, мәрхүм ирен, Унасовты, тыумыштан уҡ тип әйтерлек, яуыз «ат ҡарағы» итеп «хәтерләүе» бындай уйҙырмаларға нигеҙ итеп һалына. Хажиәхмәт Унасовтың исемен телгә алыуы ла ҡурҡыныслы ул заманда был бисара

ҡатынды, фәкәт шулай һөйләтер өсөн генә, ире артынан йәһәндәмгә олаҡтырмай тере ҡалдырғандарҙыр ҙа — ябай ауыл ҡатынынан ҡырҡ тапҡырға ҡабилиәтлерәк маһирәләрҙең дә ошондай уҡ шарттарҙа КГБ (ГПУ, НКВД) ҡурайына бейеп кенә һәләкәттән ҡотолоуҙары билдәле. Әйткәндәй, ул «хәтерләү»ҙә Хажиәхмәттең яһил ҡараҡташы итеп мөһөрләнмеш Зәйнулланың да йөйө йөйгә тура килмәй яҙмала. Беренсенән, Зәйнулла түгел, ә Зәйнуллин булһа кәрәк, икенсенән, әгәр ҙә шулай икән, ихтилалсы Унасовтың яҡын арҡадашы Зәйнуллин ул бөтөнләй башҡа сифат-кимәлдәге кеше — иң элек ҡыҙылдарҙың Польша фронтындағы батырлыҡтары өсөн (һуғышта дошмандың бер юлы 12 пулеметын тартып ала) Реввоенсовет рәйесе Л. Троцкийҙың үҙ ҡулынан ҡиммәтле бүләк алған ҡыҙыл яугир, унан һуң Башҡортостан хөкүмәтен һаҡлаусы комендант батальонының командиры (ныҡ тикшерелеп һыналған шәхес), аҙаҡ С.Ш.Мырҙабулатов етәкселегендәге ихтилал армияһының Х.Унасов даирәһендәге яугир командиры булған. Хәйер, бындай аймылыштар өсөн аптырарға ла, кемделер ғәйепләргә лә ярамай. Сөнки аймылыштырыу — Рәсәй империяһының ҡәҙимге алымы ул: азатлыҡ яулап баш күтәргән башҡорт батырҙарының бөтәһен, шул иҫәптән Салауат Юлаевты ла, «ҡараҡ» тип тамғалағандар, табаҡ-табаҡ аҡ ҡағыҙға һәм китаптарға ғына түгел, хатта маңлайҙарына ла шул тамғаны утлы тимер менән яндырып баҫҡандар...

Ул саҡта Урал тауҙарында, урмандарында Хажиәхмәт Унасовҡа оҡшаш ҡаҫҡындар күпләп күренә башлай. Рәсми телдә «бандит», «дезертир», ә халыҡса «ғизетдин» тип йөрөтөлмөш был бәндәләр һаны төрлө сәбәптәр арҡаһында ҡыҙыл фронттағы үҙ ғәскәри бүлектәренән кимтелеп ҡайтҡан ҡыҙыл әрмистәр иҫәбенән дә ишәйә. Сөнки ҡыҙыл империя башҡорт милли ғәскәрҙәрен, фронттарҙың иң дәһшәтле тамуҡ уттарына ташлап ҡырҙыртыу менән генә сикләнмәй, милли дивизия һәм бригадаларҙы, полктарҙы, хас та Колчак маҡсатын бойомға ашырғандай (сөнки империалистарҙың маҡсаты бер

үк!), ваҡ өлөштәргә бүлгесләп, миллилектәрен бөтөрөп, дөйөм армия сафтарына төрлө яҡтарға олаҡтыра — автономиялы Башҡортостан республикаһын юҡҡа сығарыу сәйәсәтен тотҡарлаусы төп көс иленән ситкә алып ташлана. Һөҙөмтәлә башҡорт халҡының фронттағы улдары менән элемтә бөтөнләй өҙөлөп, Ш.Хоҙайбирҙин әйтеүенсә, Башҡортостандың көллө төбәктәренән дә хөкүмәткә ҡыҙыл әрмис улдарының, туғандарының яҙмышын һәм ҡайҙалығын ялбарып яҙған хаттар, ғаризалар яуа башлай. Башҡортостан автономияһын бөтөрөүгә алып барылған был аҫтыртын сәйәсәт, алыҫтарға шаңдауланып, башҡорт ҡыҙыл әрмистәренең бер килкеһенең илгә ана шулай үҙ белдекле ағылыуына, «дезертир»ҙар һанын ыратыуға сәбәпсе була. Данлы башҡорт яугирҙәренең, үҙҙәре лә аңғармаҫтан, нисек итеп дезертир һәм бандит булып китеүҙәрен Н.Р.Бикбаев яҙмаларында күрәбеҙ: «Бандиттар араһында Петроград фронтынан ауырыу сәбәпле ялға ҡайтарылған ҡыҙыл әрмистәр ҙә бар ине. Улар, ауыл һайын бишәр, унар кешене, шулар иҫәбенән был ҡыҙыл әрмистәрҙең ата-әсәләрен дә, атып киткән Поленов, Руденко, Штырляев һ.б. әтрәттәренең енәйәтсел асылын фашлаған өсөн эҙәрлекләнеп, ҡулдарында ялға ҡайтарылыу тураһындағы ҡағыҙҙары була тороп та, дезертирҙар тип *атырға* хөкөм ҡылынғандан һуң ҡасып, ҡорал алып баш күтәрергә мәжбүр булғандар... Башҡорт эшмәкәрҙәренең күбеһенән, ҡаланан ситкә сыҡмаҫҡа тип, ҡултамғаларын алғандар, хатта коммунист булыуыҙарына ла ҡарамаҫтан. Шәхсәнә минең үҙемдән дә шундай ҡултамға алынды»...

«Башҡорт» тигәндә генә лә күҙҙәрен ҡан баҫҡан ошо Шәмиғолов — Мансырев хакимиәтен һәм РСФСР Үҙәк даирәләренең боҙоҡ милли сәйәсәтен ләғнәтләп, Бәләкәй Башҡортостандың бөтә ун өс кантонынан да Мәскәүгә, Эстәрлетамаҡҡа нәфрәтле резолюциялар яуҙырыла, халыҡ бер төптән автономияны яҡлап, Шәмиғолов диктатураһын танымауын белдерә. Шул йәһәттән ул саҡта Тамъян-Ҡатай кантонында әүҙем көрәшкән арҙаҡлы революционер,

Башчеканың элекке рәйесе, ә был вақиғалар осоронда республиканың Мәғлүмәт-инструктор идаралығы инструкторы Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов, Башҡортостан автономияһын ҡурсалауҙы алға һөрөп, уны юҡ итергә яҫканыусы Мәскәү сәйәсәтенә, шул сәйәсәтте кәүҙәләндергән Шәмиғолов — Мансырев режимына бер төптән ҡаршы тороу өсөн сәйәси эш йәйелдерә. Көслө рухлы халыҡ йәшәгән Бөрйән-Түңгәүер кантонында хәрби комиссар вазифаһында эш башлаған Мөхәмәтйән Ғәлиулла улы Булатов *ысын автономия өсөн* ифрат фиҙакәр көрәшселәрҙең береһе була.

М.Ғ.Булатов

Тап ана шул көндәрҙә, Шәһит Хоҙайбирҙиндың исемдәрҙе атамайынса ғына яҙған билдәле иҫтәлеге буйынса, «бер килке алдынғы етәксе иптәштәр», республикалағы ҡырҡыу хәлде тикшерергә, Темәс янындағы Рапат тауында йәшерен кәңәшмәгә йыйыла ла «кисекмәҫтән тәүәккәл саралар күрергә» ҡарар ҡыла. Шуның һөҙөмтәһен Темәс ҡасабаһында советтарҙың 25 июндә асылған 1-енсе кантон йыйынында күрәбеҙ: делегаттарҙың күпселеге Башҡортостан автономияһын бөтөрөүсе Мәскәү сәйәсәтенә, шуны үткәреүсе яңы режимға ҡаршы киҫкен нәфрәт белдерә һәм Эстәрлетамаҡтағы яңы Башревкомды танымаҫҡа, ***Темәстә үҙенә башҡа Бөтә Башҡортостан хөкүмәтен төҙөргә*** саҡыра, ә **М.Ғ.Булатов** иһә ***«Үҙәк Совет хакимиәте Башҡортостандың хоҡуҡтарын боҙа, быға ҡораллы ҡаршылыҡ күрһәтергә кәрәк,*** тип оранлай»... (ЦГАОО Р.Б., ф. 22, оп. 4, д. 21а, л. 3). Бер һүҙ менән әйткәндә,

Башҡортостан был мөҙҙәттә шартлау өсөн оҫкон ғына көткән дары мискәһен хәтерләтә. Һәм бына шул утлы оҫкон сифатында тарих майҙанына баяғы уҙаманыбыҙ — Хажиәхмәт Ғәбиҙулла улы Унасов тигән ир арыҫланы дөрөп сыға ла инде. Эйе, хөкүмәттең террорлаусы ҡырғын ғәскәрҙәренә ҡаршы көрәш башлар өсөн, халыҡтың беренсе ҡораллы әтрәтен тап ул ойоштора, башҡорттарҙы атып-киҫеп йөрөүсе поленовсыларға башлап ул һөжүм итә. Дөрөҫ, тәүҙә ете яугирҙән генә тора уның ғәскәре. Баҫмасылыҡ (партизан) һуғышы алымдарын ҡыйыу һәм оҫта ҡулланып, ылыҫ (волость) үҙәктәренә ташлана, ҡырғынсыларҙың ваҡ төркөмдәрен, уларҙың урындарҙағы ялағайҙарын үлтерә. Таланған малдарын халыҡҡа кире ҡайтара. Баяғы И.Мотаев мәрхүмдең: «Хажиәхмәт бик ҡурҡаҡ булған, шунлыҡтан тау-таштарҙы, ҡара урмандарҙы ташлап ҡола яланға сығып китергә баҙнат итә алмаған», — тигән һөҙөмтәһендә лә үҙенсә бер хаҡлыҡ барҙыр, минеңсә; ләкин быны ҡурҡаҡлыҡ итеп түгел, ә зирәклек, тапҡырлыҡ тип билдәләргә кәрәк, сөнки Хажиәхмәт батыр техник яҡтан (артиллерия, бронемашиналар, бронепоезд) ныҡ йыһазландырылған регуляр хөкүмәт армияһына ҡаршы, урындағы тәбиғи шарттарҙы йәтеш файҙаланып, йөҙәткес баҫмасылыҡ (партизан) һуғышы алып барған, шуныһы менән дә ҡурҡыныслы булған ул. Кескәй генә был әтрәттең, тауҙан түбән тәгәрләтелгән ҡар сүмәләһеләй күҙгә күренерлек ырап, тиҙ арала дәһшәтле көскә әүерелеүен үтә һаҡ автор Шәһит Хоҙайбирҙин иҫтәлегендә лә шәйләйбеҙ: «Ошо болғансыҡ, шау-шыулы осорҙа... ат ҡарағы Хажиәхмәт Унасов пәйҙә була; ҡайҙандыр тағы етәүҙе ылыҡтырып, ҡоралландырып һәм аттарға һыбайландырып, йәнәһе «башҡорт халҡын бәләнән ҡотҡарырға», Поленов әтрәтенә ҡаршы сыҡҡан булып ҡылана. Тик улар аҙ һанлы, улар асыҡ бәрелешкә бармайҙар, ә дәүләт ойошмаларына һөжүм итергә, таларға һәм берәм-һәрәм йөрөгән ҡораллы кешеләрҙе үлтерергә керешәләр. Зәки агенттары һәм кулактар көслө өгөт-нәсихәт үткәрә, халыҡты баш күтәрергә ҡоторта һәм Поленов өйөрөнөң хәтәр

ҡылыҡтары арҡаһында был өгөт-нәсихәт дәррәү маҡсатҡа өлгәшә, халыҡ уға ылыға. Август аҙағында (советтарҙың М.Ғ.Булатов оранлаған баяғы Бөрйән-Түңгәүер кантон йыйынынан һуң ай үткәс тә. — Й.С.) кантондың бер төбәгендә әтрәт һымаҡ бер нәмә барлыҡҡа килә, эш буйынса юл йөрөүҙәр ғәҙәттән тыш хәтәрләнә... Ошолай итеп башланып киткән тәртипһеҙлектәр октябргә, ноябргәсә шул тиклем

Палач Поленовтың штаб-квартираһы булған йорт. Баймаҡ

көсәйҙе ки, уны хатта яҙып аңлатыу мөмкин түгел»...

Ш.Хоҙайбирҙин хәтәр көс итеп һанаған ихтилалсыларҙы үҙе күреп белгән баяғы И.Мотаев, күпмелер хаҡлы рәүештәлер, ғибрәтле итеп һүрәтләй: «1920 йылдың көҙгө һыуыҡ айҙарында Х.Унасовтың әтрәте лә беҙҙең ауылды килеп баҫты... Иртәгәһенә мәсет алдында теҙеп ҡуйылған унасовсыларҙы күреп, малай ғына булһам да, мин бик аптырашта ҡалдым: был һалдат тигән бәндәләр торғаны менән мәсхәрә ине: уларҙың күбеһе ала-сола ямау һалынған тире тунда, ҡайһылары тула сәкмән кейгәндәр. Шунлыҡтан улар бер ҙә һалдатҡа оҡшамағандар ине. Уларҙың ҡоралдарын күреп, тағы ла аптырауға ҡалырһың — һөңгө, һәнәк, суҡмар, балта тағып аттарының өҫтөндә суҡайышып ултыралар. Ҡайһыларында борон һунарсылар йөрөткән

сиртмәкле мылтыҡтары күренде». Был һүҙҙәрҙе совет осоро әүҙемәне, әлбиттә, ул саҡтағы Хажиәхмәт Унасов әтрәте яугирҙәрен әҙәмгә һанамайынса (дезертирҙар, бандиттар, ат ҡараҡтары!..), кәмһетеберәк әйтә. Ләкин минең күңелемдә мыҫҡыллау тыуҙырманы ул, ә, киреһенсә, үлемесле мәлдәрҙә лә үҙенең бәҫен һаҡлай белгән ҡыйыу йөрәкле халҡыма ҡарата әрнеү ҡатыш бөйөк ғорурлыҡ ҡына уятты. Сөнки тупһабыҙҙан әжәл һүреп кергән ғәрәсәтле, афәтле шул йылда ғәзиз олатайҙарыбыҙ һыбайланмыш ябай аттарын, өҫтәрендәге ямаулы тундарын, эстәрендәге саҡ сыҡмаған йәндәрен (аяуһыҙ аслыҡ осоро!..) ҡурсалап дәһшәтле яуға сыҡҡандар, тулайым ҡырылып бөтөүгә (геноцидҡа) ҡаршы күтәрелгәндәр. Шуға күрә лә бит бөгөн беҙҙәр бар һәм үҙ дәүләтебеҙгә, үҙ йөҙөбөҙгә эйә. Ысын халыҡ ихтилалы булған был. Хатта Шәһит Хоҙайбирҙин да юҡҡа ғына әйтмәй бит: «Винтовкаға бөтәһе лә эйә түгел ине, күпселегенең ҡулында тимер башаҡлы таяҡтар, балталар, һөймәндәр, суҡмарҙар булып, атҡа һыбайланғандарҙың араһында ***бөтәһе лә — ун биш йәшлек малайҙарҙан алып аҡһаҡалдарға тиклем бар ине»*** (мин һыҙыҡ өҫтөнә алдым. — Й.С.)...

Ялҡынға май һалғандай, Темәскә һәм Баймаҡҡа диктатор Шәмиғоловтың урынбаҫары Мансырев килеп китә лә поленовсыларҙың ҡанлы эштәренә дәүләт хакимиәте исеменән рухландырғыс фатиха бирә. Халыҡтың ҡораллы көрәше, уғата ялҡынланып, ун өс кантондың ун берендә дөрләп яна, ҡанлы режимдың ҡулы аҫтында өс кантон ғына ҡала, ә һигеҙендә халыҡ үҙе хакимлыҡ ҡыла. Үҙ режимына янаған был мөшкөл хәлде Шәмиғолов партия өлкә комитетының 1920 йыл 17 сентябрь пленумында танырға мәжбүр була: «КП(б) Үҙәк Комитетында һәр кантондан резолюция бар — яңы үҙәкте (Шәмиғолов диктатураһын. — Й.С.) танымауҙары, Вәлидов менән Йомағоловты ғына таныуҙары тураһында (тимәк, республика халҡы тулыһынса Шәмиғолов режимына ҡаршы. — Й.С.). Беҙ юлландырған беҙҙең өгөтсөләр, күрәһегеҙ, милли сәйәсәт үткәрәләр (улары ла милли автономияны яҡлап

өгөтләй, тимәк. — Й.С.). Аныҡ әйтергә кәрәк беҙгә: йә түңкәрелешкә тиклемге Башҡортостан (фетнәүи түңкәрелеш арҡаһында хакимиәт башына килгәнлектәрен йәшермәйҙәр. — Й.С.), йә милләтселәр өҫтөнән контроль, ***ҡаты диктатура*** (диктатор булыуы ла асыҡ. — Й.С.)... йә милләтселәрҙең башҡайынан һыйпарға, йә баш һөйәктәрен сәсрәткәнсе һуғырға». (ЦГАОО Р.Б., ф. 22, оп. 4, д. 16, л. 18). Ысынлап та, Шәмиғолов диктатураһы Башҡортостанда башҡорттарҙың баш һөйәктәрен сәсрәткәнсе һуғырға керешә... Һөҙөмтәлә, республиканың Сәйәсәт идаралығы башлығы К.И. Голодович таныуынса, башҡорт халҡы «ғазават»ҡа (изге һуғышҡа) күтәрелә, ун өс кантондың ун берендә хөкүмәт тарафынан һуғыш хәле иғлан ҡылынып, баш күтәргән, рәсми телдә «бандиттар һәм дезертирҙар» тип тамғаланған башҡорт халҡын рәхимһеҙ баҫтырырға бер-бер артлы төрлө яҡтарҙан ғәскәрҙәр, ҡырғын әтрәттәре ябырыла. (ЦГИА Р.Б., ф. Р-1107, оп. 1, д. 145, л. 75). Ихтилалды ауыҙлыҡларға күренекле башҡорт та тос өлөшөн керетһен өсөн, Польша фронтындағы 12-нсе армиянан махсус фарман менән (ЦГАОО Р.Б., ф. 22, оп. 5, д. 51, л. 51 һәм ф. 1832, оп. 3, д. 336, л. 1) яуҙарҙа һыналған ҡыҙыл комбриг Муса Мортазин ҡайтарыла...

1918 йылда автономиясы башҡорт яугирҙәрен атҡарткан Л.А.Азановҡа һәйкәл. Баймаҡ

Ихтилал ни хәлдә һуң?

Ихтилалдың етәксеһе, 1913 йылдан биреле хәрби кейемен өҫтөнән һалмаған С.Ш.Мырҙабулатов, яҡшы белә: хөкүмәттең регуляр ғәскәрҙәренә шундай уҡ ғәскәр менән генә ҡаршы торорға мөмкин, шунда ғына ҡаршылаш яҡ һинең менән иҫәпләшә, һөйләшә. Әгәр шулай булмаһа, ул һине дөйәләй тубыҡландыртмайынса йә иҫә ҡырып бөтөрмәйенсә тынмай. Һәм ул үҙенең халыҡ ғәскәрҙәрен тиҙ

арала заманса арыу ҡоралланған ысын *регуляр армия* итеп өлгөртә. Урал тауҙарының тәбиғи шарттарын (хөкүмәт ғәскәрҙәренә үтеүе ҡыйын булған тау-таш, урман шырлығы) оҫта файҙаланып, баш күтәреүселәр, хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡаршы асыҡ алыштарҙа үҙҙәренең регуляр ғәскәрҙәрен ҡулланыу менән бергә, бик ныҡыш баҫмасылыҡ (партизан) һуғышы алып баралар. Шулай итеп, 1918 йылғы Әхмәтзәки Вәлидов башҡорт регуляр армияһын төҙөгән һәм һуғышҡа алып кергәндән һуң, ике йыл үтер-үтмәҫтән үк, Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов икенсе тапҡыр регуляр башҡорт армияһын төҙөп өлгөрттө, бының менән ул халҡыбыҙ ата-бабаларҙың данлы яугирлек традицияларын онотмауын, шуға тоғролоҡло булып ҡалыуын иҫбатланы.

Ихтилалдың, уны баҫтырыусылары башта тамғалаған ябай бандитсылыҡ ҡына булмайынса, *башҡорт халҡының милли-азатлыҡ көрәше* икәнлеген үҙ елкәләрендә татырға ла танырға мәжбүр булған Эстәрлетамаҡ, Мәскәү хакимдарҙары, ҡоралланған ғорур халыҡты тиҙ генә һындырып булмаҫын, ниһәйәт, аңлап һәм Рәсәйҙең башҡа яҡтарҙағы ихтилалдарына -- ҙур янғынға тоташып китеү ихтималлығынан ҡурҡып, баш күтәреүселәр менән *һөйләшеп килешеү* яйын ҡармалай башлай, был иһә Сөләймән Мырҙабулатовтың һәм арҡадаштарының төп теләгенә тап килә. Сөнки ул ваҡытта инде ихтилалдың төп маҡсаты үтәлгән — ҡанлы Шәмиғолов диктатураһы алып ташланған була. Ике яҡтың осрашып һөйләшеүе Темәс ауылында бара һәм, билдәле булыуынса, шул 1920 йылдың ноябрь аҙаҡтарында ике-ара Килешеүгә ҡул ҡуйыла. Баш күтәргән башҡорт халҡы исеменән ҡаршы яҡҡа ҡуйылған ғәҙел талаптарҙың иң күп өлөшө Үҙәк хөкүмәт һәм Башҡортостан хөкүмәте вәкилдәре тарафынан ҡабул ҡылып алына ла бойомға ашырыла башлай. С.Ш. Мырҙабулатов ихтилалы, хакимлыҡ итеүсе партияның үҙе тарафынан уҡ, «бандитсылыҡ» ләҡәбенән арындырылып, ***башҡорт халҡының милли-азатлыҡ хәрәкәте, тип рәсми таныла һәм иғлан ҡылына.*** Шәмиғолов диктатураһы аҫтында бына-бына Рәсәйҙең бер гөбөрнәһенә

әйләндерелергә торған Башҡортостан артабан да автономиялы Башҡортостан республикаһы булып йәшәү хоҡуғын ҡабат яулай, ошо хоҡуҡ бер ыңғайҙан Рәсәйҙең башҡа бөтә автономияларына ла тарала. Тимәк, урыҫ булмаған милләттәрҙең урыҫ дәүләте эсендәге дәүләтселлек формалары С.Ш.Мырҙабулатов етәкләгән һәм Хажиәхмәт Унасов кеүек уҙамандар мөһим роль уйнаған *башҡорт ихтилалы* арҡаһында һаҡлап алып ҡалына.

С.Ш. Мырҙабулатов армияһының дивизия командиры Х.Унасов, оҫкор әтрәт (дивизия) командиры Ф.Мәғәсүмов һәм бер килке башҡалар, хөкүмәт яғы менән Килешеү шарттарына ризалыҡ бирһәләр ҙә, шуларҙың нисек үтәлешен һаҡлап һәм шикләнеп, Эстәрлетамаҡҡа йүнәлеүсе С.Мырҙабулатов h.б. менән бергә бармай тороп ҡалалар һәм ҡоралдарын һалырға ла ашыҡмайҙар. Килешеүҙең улар өсөн мөһим һаналған бер-нисә пунктының (Вәлидовты Башҡортостанға эш башына ҡайтарыу, ятбауыр-шовинистарҙы баш ҡаланан һөрөү, Поленов кеүек енәйәтселәрҙе ғәҙел хөкөмгә тарттырыу) партия Өлкә комитеты тарафынан ҡабул ҡылынмауына йәки тоҡарланыуына яуап итеп, буғай, был командирҙар декабрь айында уҡ Килешеүҙе боҙоп, ҡабат хәрби хәрәкәттәрен башлай — Орск өйәҙе тимер юл буйы ауылдарын тағы һуғыш ялҡыны ялмап ала. Баш күтәрмеш Йылайыр урыҫтары ла башҡорттар менән берләшергә ынтылғас (ЦГИА Р.Б., ф. Р-1107, оп. 1, д. 145, л. 123), һүндерелде тип һаналған ихтилал-янғын ҡабат дөрләй, хәҙер инде Урал артында үҙ аллы эш ҡылыусы Хажиәхмәт Унасов ҡабат ҡурҡыныс фигураға әйләнә. 1920 йылдың 4 декабрендә Башобком президиумы ултырышы, Мәскәү вәкиле П.Н.Мостовенконың докладын тыңлап, Килешеү шарттарын бойомға ашырыуҙы ашыҡтырыу тураһында ҡарар ҡабул ҡылырға мәжбүр була. Тимәк, Хажиәхмәт Унасов республика етәкселегендәге бөйөк державасы шовинистарҙы уғата тетрәндерә. Улар ғына түгел, Үҙәк (Мәскәү) етәкселеге лә етди хәүефләнгәндер. Хәүефләнмәҫлек тә түгел шул: Хажиәхмәт Унасовтың яңы хәрәкәте айырым Бәләкәй Башҡортостан

ҡыҫаларынан сығыу, дөйөм Рәсәй күләмендәге хәрәкәткә тоташыу менән янай. Сөнки Башҡортостан көнбайышында ла (Иҙел буйы), көнсығышында ла (Себер) советтарға ҡаршы нәфрәтле ихтилал усаҡтары дөрләй. Тамбов өлкәһендә ҡеүәтле Антонов ихтилалы туҡтамай һаман (50 мең кешелек 2 армияһы бар)... Хәҙер инде билдәле: шул көндәрҙә «1921 йылдың 31 ғинуарында Себерҙең Ишем өйәҙендә кулак-эсер фетнәһе ҡоторондо, февраль урталарында ул бик ҙур майҙанды ялманы. Ихтилал Бараба, Урал буйы һәм ҡаҙаҡ далаларын, Омск гөбөрнәһе райондарын, Обдорскиға тиклем Тобол гөбөрнәһенең төньяғын ялмап алды. Баш күтәреүселәр бернисә көн эсендә 40 мең кешенән ашыу армия тупланылар. Фетнәселәр байтаҡ тимер юл станцияларын ҡулға төшөрҙөләр, Ишем, Барабинск, Канск, Татарск, Тобольск, Кокчетав, Петропавловск ҡалаларын алдылар... Үҙәк райондарҙағы һымаҡ уҡ, «Коммунистарһыҙ советтар булһын!» шиғарын (лозунгыһын) күтәрҙеләр». (Ю.К. Стрижков. Продовольственные отряды в годы гражданской войны и иностранной интервенции, 1917 — 1921. М., 1973; 279 — 280-енсе биттәр). Әйткәндәй, Хажиәхмәт Унасовтың ошо ҡабаттан ҡуҙғалышы туҡтатылғас, уны әүҙем баҫтырыусы М.Л.Мортазиндың атлы дивизионы тап шул Себер ихтилалын баҫтырырға Петропавловскиға ебәрелә... Баяғы уҡ шиғар аҫтында апрель айында Самара гөбөрнәһендә элекке ғәйәр коммунист, С.Ш.Мырҙабулатов ихтилалын баҫтырышыусы Охранюк-Черский советтарға ҡаршы баш күтәрә, уның халыҡ армияһы, юлындағы кәртәләрҙе яҙғы ташҡындай емереп, туптура Башҡортостанға дөрөп керә. Ошолар нигеҙендә фаразлап, моғайын, Дзержинский ВЧК-һы һәләкәт менән янаусы был хәлдәрҙе алдан уҡ иҫкәрткән дә баш бирмәүсән ихтилалсы Хажиәхмәт Унасовты эш үтмәҫ элек үк юҡ иттертеү сараһын күреп өлгөргән, тип билдәләй алабыҙ...

Мәғлүм булыуынса, Хажиәхмәт Унасовтың ҡылын тартып өгөтләү эшенә Бөрйән-Түңгәүер кантоны етәкселегенән Ш.Ә.Хоҙайбирҙин менән баяғы А.С.Насиров йәлеп ителә,

батыр менән уларҙың күрешеп һөйләшеүе уңышһыҙ тамамлана. Оҙаҡламай, хөкүмәт ҡарары менән, хәрәкәтте тыныс юл менән туҡтатырға Х.Х.Унасовтың элекке башлығы, ә Килешеүҙән һуң республиканың Наркомвоен ярҙамсыһы С.Ш.Мырҙабулатовты Темәскә — ихтилалсыларға ҡаршы һуғышыусы комбриг Г.И. Симонов штабына юлландыралар. Ул иһә унасовсылар менән дә, Йылайыр урыҫтары менән дә бер юлы уртаҡ тел таба ла ҡан ҡойошоуҙы туҡтата, ихтилалсылар, юлбашсыһы Х.Х.Унасов менән бергә ҡорал һалып, тыныс юл менән ҡабат советтар яғына сыға. Эштең шулай еңел тамамланыуына симоновсылар хатта аптырап ҡала. Бына Симонов штабында хеҙмәт иткән Ш.А.Ашрапов (Ҡазан татары) яҙмаһы: «Темәстең яртыһы беҙҙең яҡҡа сыҡмыш ихтилалсылар менән тулғайны, ҡоралдары һәм аттары ҡулдарында ине әле. Ихтилал етәкселәре Мырҙабулатов һәм Сәғитов[3] унда Симонов иптәш менән берҙәм эшләнеләр. Ошонда уҡ Имаҡов та бар ине. Бөтәһе лә хөрмәт иткән һәм ҡурҡыңҡыраған сағыу фигура — Хажиәхмәт ине... Тышҡы ҡиәфәте менән дә, эске йөкмәткеһе менән дә бандит ине ул... Ихтилалсыларҙы ҡоралһыҙландырыу беҙгә көтмәгәнсә еңелгә төштө. Элекке ихтилалсыларҙың бөтәһен урамға теҙҙек, телмәрҙәр менән Симонов иптәш, унан һуң мин һәм, өсөнсөһөн хәтерләмәйем, ихтилалсыларҙың элекке «юлбашсы»ларынан кемдер сығыш яһаныҡ. Һөйләшкәндән аҙаҡ, уларға ҡоралдарын алдарына һалырға тәҡдим иттек. Бер кем дә бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәне».

Инде «бандит» тип аталған Хажиәхмәт Унасовтың асылына ҡайтайыҡ. Үкенескә ҡаршы, ҡаһармандарыбыҙ араһындағы күренекле был шәхестең фотоһы ла, ҡағыҙға яҙылмыш тәржемәи хәле лә һаҡланып ҡалмаған кеүек. Уны

---

[3] Сәғитов – Мөхәмәт-Хәйҙәр Сәғитов, Польша фронтында Муса Мортазин бригадаһының штаб башлығы, 1920 йылда (М.Ғ.Булатовҡа тиклем) Бөрйән-Түңгәүер кантонының хәрби комиссары; ихтилал башланғас, Баш күтәреүсе Реввоенсовет рәйесе С.Ш.Мырҙабулатовтың ярҙамсыһы.

яҡындан күреп белгән кешеләр ҙә, бер ниндәй ҙә яҙма иҫтәлек ҡалдырмай, китеп барғандар донъянан, сөнки уның менән бергә булыуҙы белдереү ҙә үҙеңде бандит тип таныуға — бәлә-ҡазаға юлыҡтырған. Шуға күрә уҡыусыбыҙ ҡыҙыҡһыныуын ихтилалды баҫтырыусылар тарафынан урыҡ-һурыҡ теркәлгән ҡайһы бер мәғлүмәттәр менән генә ҡәнәғәтләндерә алабыҙ.

Килешеү төҙөшөргә барған хөкүмәт комиссияһы ағзаһы Н.Р. Бикбаевтың күҙенән:

Маңғаҙы ауылындағы «иркен ҙур бүлмәлә ихтилалсыларҙың ун бишләбе төшкө ашҡа йыйылғайны. Мине, башҡорт йолаһынса, ҡунаҡ рәүешле ҡабул иттеләр ҙә табын түренә ултырттылар. Миңә инде таныш ихтилал етәкселәре Ғәлин менән Мостафин да бында ине. Ихтилалсылар, бер-береһен бүлдереп, Эстәрлетамаҡ һәм уның менән кем идара ҡылыуы тураһында һораштылар, ирекле баҙар булырмы, кантон еренән Поленов һәм башҡаларҙың әтрәттәрен алырҙармы, хөкүмәт яғына сыҡҡандан һуң, ихтилалсыларҙы ҡоралһыҙландырасаҡтармы, тип белештеләр... Эргәмдә ултырған Хажиәхмәт миңә барыһынан да күберәк һорауҙар бирҙе лә яуаптарыма ифрат та ныҡ бәйләнде... Унасов тураһында мин шуны белдем: бәләкәй буйлы кеше, аҙ грамоталы, аҡтарҙың Вәлидов армияһында каптенармус булып хеҙмәт иткән. Ул бандиттарҙың бөтәһенән дә шәберәк кейенгән, өҫтөндә йәшел төҫлө хәрби бекеша, билендә бер ыңғай ике наган, арҡаһында ҡайыш элмәкле карабин. Бандиттар араһында мин Вәлидовтың конвой командаһындағы элекке ҡыҙыл әрмистәрҙе таныным...

Штабта ихтилалсыларҙың бындағы бөтә башлыҡтары йыйылды. Унасовҡа мин үҙем менән бергә Баймаҡҡа барырға тәҡдим иттем, унда Мостовенко һәм Ҡарамышев иптәштәр килеп етергә тейеш ине. Хажиәхмәт унда барыуҙан ҡырҡа баш тартты. Ярандарым һөйләшеүҙәр алып барырға риза икән, мин уларҙы тотанаклайым (поддерживаю) һәм 40 кешелек әтрәт менән үҙемдең иң ышаныслы кешеләремде ебәрәм, тине ул. Үҙенең делегаттары сифатында Ғәлинде, Мостафин Мотаһарҙы

һәм Маниһыр ауылынан Сәғитов ҡартты (мулланы) тәҡдим итте... Мин килеп еткәндә Мостовенко, Ҡарамышев иптәштәр һәм ихтилалсыларҙың башлыҡтары Мырҙабулатов, Айытбаев һ.б. Баймаҡта ине... Ғәлин һәм Мостафин ихтилал етәксеһе Мырҙабулатов алдында беҙгә үҙҙәренең һәм Хажиәхмәт Унасовтың ҡоралдарын ҡулдарында ҡалдырыу шарты менән, советтар яғына сығырға риза икәнлектәрен белдерҙеләр. Этҡол (Урман-Этҡол) ауылында йыйылырға килешкәс, Унасов вәкилдәре ҡайтып китте, ә Обком делегацияһы иһә баяғы йыйылыу урыны 1-енсе Этҡолға йүнәлде...

Хажиәхмәт Унасов килеп еткәс, бөтә делегация Мырҙабулатов һәм Юламанов һ.б. менән бергә кәңәшмә ойошторҙо, унда Унасовҡа Эстәрлетамаҡҡа юлланырға тәҡдим ителде. Унасов ҡырҡа баш тартты. Әммә ул митингыла кәңәшмә ҡарарҙарын яҡлап сығырға вәғәҙә бирҙе. Митингыла Унасов һәм Ғөбәйҙуллин (Үҫәргән кантонындағы ихтилалсыларҙың етәкселәренең береһе), баш күтәреүселәрҙең аңһыҙ массаларын файҙаланып, эшебеҙгә тотҡарлыҡ ҡыла башланы. Ләкин делегация ул әҙәмдәрҙең ҡылыҡтарын туҡтатырлыҡ киҫкен саралар күрҙе» (Зәйнуллин-батырҙы – Баймаҡтан сыҡҡас, Унасов ғәскәренең ете командирын һәм аҙаҡ Унасовтың үҙен Темәс юлында мәкерле үлтереүгә тоташа, ахыры, был «саралар»)...

Шәһит Хоҙайбирҙин иһә халыҡ батырын ошолай нарыҡлай (1920 йылдың декабре):

«Юлыҡҡа ҡояш байығанда килеп еттек... Хажиҙың (йәғни Хажиәхмәт Унасовтың. — Й.С.) килеүенә халыҡ урамға эркелде, мөйөш һайын, тип әйтерлек, төркөмләнеп торалар, ни тураһындалыр хәбәрләшәләр. Шунан һуң беҙ туҡталған фатир эргәһенә йыйылдылар... Хажиәхмәттең теләгән бер әмерен үтәргә атлығып торған ауыл ялағайҙары, әлбиттә, хатта өйгә үк дөрөп килеп керәләр... Юлыҡ кулактары һыйларға кереште беҙҙе: аш-һыу әҙерләгәндәр, өйҙән-өйгә йөрөтәләр. Беҙ, әлбиттә, бындай ҡәҙер-хөрмәттең беҙгә Хажиәхмәт арҡаһында күрһәтелеүен белә инек... Хажи бында — «хоҙай ҙа,

батша ла». Ул нисек әйтһә, бөтәһе шулай эшләнә... Иртәнсәк, сәйҙән һуң, урамға йыйылған халыҡ беҙҙең сығыуҙы, ни өсөн килгәнлегебеҙҙе аңлатыуҙы һораны... Беренсе Хажи һөйләне. Халыҡтың мөлкәтле ҡатламы уны ифрат тәбрикләп, рәхмәттәренә күмеп ташланы. Ул, әлбиттә, үҙен халыҡты яҡлаусы, халыҡты иҙеүселәргә ҡаршы һуғышыусы батыр, ҡаһарман итеп күрһәтте һәм бында ла шуның өсөн килеүен белдерҙе. Шунан һуң Насиров иптәш һүҙ алды. Насировты һәм мине халыҡ яҡшы белә ине. Шуға күрә, ул һөйләй башлар-башламаҫтан, халыҡ шаулашты, түбәндәгегә оҡшаш һөрәндәр торған һайын көслөрәк яңғыраны: «Етер коммунистарға беҙҙе талау, әйҙә, телеңә күп һалышма, һөйрәп төшөрөгөҙ үҙен, уралмаһын аяҡ аҫтында»... Халыҡ ҡыҙышты һаман. Йәмәғәтте тынысландырыр өсөн, тағы сығыш яһаны Хажи, килеү маҡсатыбыҙҙы аңлатып, беҙҙең адресҡа рәнйеткес һүҙҙәр әйтелеүгә юл ҡуймаҫҡа вәғәҙә биреүен белдереп, тынылыҡ һаҡлауҙарын һораны. Шунан һуң миңә һүҙ бирелде... Уларҙың талабы: разверстканы бөтөрөргә, ирекле баҙар рөхсәт итергә; бөтә ятбауыр ҡораллы әтрәттәр, ҡоралдарын халыҡҡа тапшырып, олағырға тейештәр кантондан h.б. Ул ғына ла етмәһә, Хажи, беҙҙән бүленеп, урыҫтар менән айырым һөйләшкән дә улар менән бергә хәрәкәт итергә һүҙ биргән... Йыйылыш бөтөнләй башҡа рухта үҙгәрҙе... Хажи, Килешеү аҫтына мин имза ҡуйманым, хәҙер үҙ кешеләремде күтәрәм дә ҡаналар (Кананикольский урыҫтары. — Й.С.) менән берлектә Баймаҡҡа, Йылайырға ябырылам, тип белдереп, сығып китте күтәрелеп. Беҙҙең һүҙгә ҡолаҡ һалыусы ла юҡ, хөрт була башланы эштәребеҙ... Хажи, көс туплау өсөн кешеләрен күрше ауылдарға юлландырып, ҡулы аҫтындағы әтрәттәрҙең башлыҡтарына Баймаҡҡа һөжүм яһау тураһында әмерҙәрен ебәреп, төнө буйына мәшәкәтләнде.

Иртәнсәк, сәй эсеп, ҡайтырға юлландыҡ. Хажи беҙҙе Баймаҡҡа ун саҡрым етәрәктәге ауылғаса үҙенең әтрәте менән оҙатып барҙы.

Хажи юлда кешеләрҙе үҙ әтрәтенә йыя. Вәғәҙәләр бирә, өгөтләй халыҡты. Туҡталыштарҙа башҡорт һикеләренең түренә уҙып, иң хөрмәтле урында аяҡ бөкләп ултырып, коммунистарҙы хурларға керешә. Ауыл ялағайҙары, әлбиттә, һырып ала уны, әйткән берен: «Аллаһы әкбәр, хуп!» — тигән алҡышлауҙар менән нығыта».

Эйе, хөкүмәт вәкиле Ш.Хоҙайбирҙин, батырҙың исемен кәмһетеберәк, Хажи тип, үҙен хурлап «ат ҡарағы» тип яҙһа ла, уның талантлы, күренекле, халҡы тарафынан һөйөклө оло шәхес булыуын йәшерә алмай... Өлгөлө коммунисыбыҙҙың бигерәк тә йәненә тейгәне — Хажиәхмәт Унасовтың коммунистарға бер тамсы ла ышанмауы, уларҙы өрәк урынына күреүе булғандыр, моғайын:

«Бер ауылда Хажи ошондай телмәр тота: «Быйыл тыуған балаларҙы метрика кенәгәһенә теркәргә ярамаҫ, уларҙы йә үлтереп юҡ итергә, йә ҡайҙа булһа ла бер айырым урынға йыйып аҫырарға кәрәктер. Юғиһә, ҙурайғас, улар тағы коммуна хаҡына донъяны болғатасаҡ». Ялағайҙар быға ла ҡул ҡуялар: «Шулай, шулай!»

Ш.Ә.Хоҙайбирҙин яҙған был һүҙҙәрҙе, әйтеүе әгәр ҙә хаҡ булһа, Хажиәхмәт Унасов, әлбиттә, киләсәк донъяны коммуна бәләһенән ҡотҡарыу өсөн, коммуна ҡиәмәтендә тыуған балаларҙан ҡотолоу кәрәклегенә ысынлап та ышанғанлыҡтан түгел, ә кантондың күренекле коммунисының теңкәһенә тейеү өсөн генә теҙеүе ихтимал...

Халыҡ ҡаһарманының фажиғәле һәләк булыуы тураһында ла ҡаршылыҡлы һәм үтә һаран мәғлүмәттәр генә һаҡланып ҡалған. Уларҙың тулырағы, байырағы, хатта беҙ көтмәгәнсә теүәлерәге, әлбиттә, беҙҙең өсөн әлегәсә бикле ҡалмыш Башчека, ВЧК архивтарындалыр. Сөнки бөтәһен дә ишетеп күрә-белә һәм хәл ҡыла торған ул органдар ҡатнашмай ҡалмаҫ был эшкә. Хажиәхмәт Унасовтың ҡылын тартырға юлландырылған баяғы ике уҙамандың да, бигерәк тә икенсеһенең, шул органдар менән тура элемтәлә булыуына һис ғәжәпләнмәҫ инем. Уртаҡ тел табыуы мөмкин түгел ихтилалсы

тураһындағы уларҙың юғарыға сигналы, моғайын, Хажиәхмәт Унасовтың яҙмышын хәл ҡылғандыр.

С.Ш.Мырҙабулатовтың оло абруйы арҡаһында өлгәшелгән тыныс юл менән икенсе тапҡыр килешеп ҡорал һалыуҙан һуң, ғәҙәттәгесә, Хажиәхмәт Унасов һ.б. етәксе ихтилалсылар хөкүмәт вәкилдәре менән бергә баш ҡалаға (Эстәрлетамаҡҡа) китергә тейеш була. Ошонан башлап, ваҡиғалар ҡырҡа ҡыңғырға борола, яҙмыштарҙы үҙ ҡулында уйнатыусы ҡораллы көс эйәһе — ҡырғын бригадаһы командиры Г.И. Симонов, юғары даирәләр тарафынан программалаштырылғандай, һәләкәтле юҫыҡтан ғына илтә. Иң элек ул ихтилалсыларҙың Хажиәхмәт Унасовтан кесерәк командирҙарын — ете уҙаманды батальон комиссары Чирков командалығындағы ғәскәр ҡарамағында юлға оҙата, Унасовты иң аҙаҡтан үҙе менән алып китергә ҡалдыра. Һәр хәлдә, канткомға ул шулай тип хисап бирә. Әммә баяғы Чирковҡа ул ихтилалсы ете командирҙы Темәстән сыҡҡас та атып үлтерергә йәшерен әмер ҡыла, Чирков дүртенсе саҡрымда еренә еткереп үтәй быны. Яуызлыҡты сәйәси комиссия башлығы Н.Р.Бикбаев белеп ҡалып (ауыл осонда атыуҙары ишетелеп тора), кантон етәкселеген аяҡҡа баҫтырғас һәм Чирков үҙенә бирелгән баяғы йәшерен әмерҙе фашлағас, Симонов үҙенең Чирковҡа биргән шул йәшерен әмеренән баш тартып, енәйәт ебенең осон симәлтеү өсөн, Чирковты, шунда уҡ ҡулға алдыртып, нәфрәтләнгән халыҡтың күҙ алдында аттырта ла, Мырҙабулатов, Сәғитов һәм Хажиәхмәт Унасовтар тейәлгән ылауҙарҙа Эстәрлетамаҡҡа юллана. Атылып та осраҡлы рәүештә тере ҡалмыш Чирков, аңына килеп, тағы бөтәһен дә дөрөҫләп һөйләп бирә. Яралыны тиҙерәк Эстәрлетамаҡҡа илтәләр, ә унан ашығыс рәүештә Мәскәүгә оҙаталар (енәйәттең тере шаһитынан арынырғамы?..). Был мәғлүмәттәр Н.Р.Бикбаев һәм Ш.А.Ашрапов яҙмаларына теркәлгән.

«...Темәстән Эстәрлетамаҡҡа Симонов иптәш һәм ихтилал етәксеһе Мырҙабулатов алып киткән Хажиәхмәт Унасов, — ти Н.Р.Бикбаев, — юл буйында Тәкәһуҡҡан утары

эргәһендә атып үлтерелгән». Кем үлтергәнен әйтмәй. Ылауҙарҙың береһендә киткән С.Ш.Мырҙабулатовтың күп кенә һанлы, М.-Х. Сәғитовтың бик аҙ һанлы яҙмаларында иһә Хажиәхмәт Унасовтың хатта исеме лә телгә алынмай (һаҡлыҡ маҡсатында, буғай, ихтилалсы арҡадаштарының башҡаларын да бер саҡта ла атамай улар).

М.Л.Мортазиндың 1927 йылда баҫылып сыҡҡан «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында» тигән билдәле китабында текст аҫтындағы иҫкәртмә рәүешендә генә сәйер мәғлүмәт бирелгән: «Банда башлыҡтары Хажиәхмәт Унасов, Зәйнуллин һәм башҡалар Мырҙабулатов тарафынан атылды». Ләкин шомло мәғлүмәттең икенсе яртыһы әле үк юҡҡа сыҡты: «Зәйнуллин һәм башҡалар»ҙың Симонов әмере буйынса атып үлтерелеүен белдек бит. Хажиәхмәт Унасовты ла бит мәкерле үлтерергә йәтешләнгән шул Симонов үҙе менән бергә алып китә, тимәк...

Сеймәлтелгән ептең осон Симонов ылауҙарында бергә барған баяғы Ш.А.Ашрапов яҙмаларынан юллайбыҙ. Был мәсьәләгә Ашрапов, төрлө йылдар үткәндән һуң, һүҙ ыңғайында ике тапҡыр ҡағыла. Беренсеһе 1934 йыл менән билдәләнгән; икенсеһе, тәүге яҙылыу датаһы 1928 йыл тип иҫкәртелеп, байтаҡ йылдар үткәндән һуң яңыртылып, датаһыҙ ҡалдырылған, ләкин архивта шул уҡ авторҙың 1969 йылғы бер яҙмаһы менән ҡуша теркәлгән ул. Икеһендә лә юл буйында Хажиәхмәт Унасовты үҙ ҡулы менән атып үлтереүсе итеп Сәғитов күрһәтелгән (тимәк, Мырҙабулатов түгел): «Хажиәхмәт ихтилалсылар араһындағы арҙаҡлы шәхестәрҙең береһе ине. Ул миңә ҡайһы саҡ Мырҙабулатов менән Сәғитовтан да күренеклерәк һымаҡ тойолдо. Ул урманда төндә Сәғитов тарафынан үлтерелде, Сәғитов шул маҡсатта уның менән бер санаға ултырҙы ла беҙҙән арттараҡ ҡалды». Шикләндерә был хәбәр: күренекле ике «бандит»ты, һис юғында эргәләренә өсөнсө күҙ-ҡолаҡ ҡуймайынса, нисек итеп бер санаға ултыртһындар, етмәһә, ҡара төндә, ҡара урман ҡыҫаһында арттараҡ ҡалдырһындар? Юҡ, бындай хәрби һуҡырлыҡҡа

Симонов та, Ашрапов та һис бармаҫ. Һуғыш хәленең үҫ хәүефһеҙлек ҡанундары бар. Ә бәлки, ул өсөнсө күҫ-ҡолаҡ — Симоновтың ышаныслыһы Ашрапов үҫе булғандыр?..

«Һуңынан ул (Сәғитов. — Й.С.) түбәндәгеләрҙе һөйләне миңә: ул, йәнәһе тәбиғи хәжәттәрҙе үтәргә, атты туҡтата. Хәжиәхмәт Унасов сананан төшкәс, Сәғитов уға уның, Хажиәхмәттең, һуңғы сәғәте һуҡҡанлығын иғлан ҡыла. Тегеһе уға, мин быны көткәйнем, тип яуаплай; Сәғитовтан тик фәҡәт шуны ғына — атыуын, ә тураҡламауын үтенә. Сәғитов шулай итә лә. Яҙғыһын уны (мәйетте) крәҫтиәндәр ҡар аҫтынан тапҡандар ҙа «Хажиәхмәт-бандит»ты танығандар шунда уҡ... һуңынан, байтаҡ ваҡыт үткәс, Эстәрлетамаҡта Мырҙабулатов минең менән һөйләшкәндә Хажиәхмәт тураһында иҫенә төшөргәйнем, ул миңә әйтте: «Уны Эстәрлетамаҡҡа килтереп еткермәй үлтереү беҙҙең өсөн...». Бындағы күп нөктәле урынды автор тәүҙә аҡ килеш буш ҡалдырған (Мырҙабулатов әйткәнде түгел, ә сәйәси ҡалыпҡа керетеп үҫе уйлап сығарасаҡ һүҙҙәрҙе йәтешләп яҙып ҡуйыу өсөн, буғай). Шунан һуң ул әүәле ҡара менән яҙылған шул текстағы буш урынды ябай ҡәләм менән «файҙалы ине» тип тултырған да (ә Мырҙабулатов, бәлки, «фажиғәле булды» тигәндер?..). Һуңынан уныһын да һыҙып ташлаған (уғата сәйәси мәғәнәлерәк фекер теркәү өсөндөр). Сөнки заманында Башчека рәйесе булған, утты-һыуҙы үтеп сыҡҡан Мырҙабулатов, хатта дөрөҫ булғанда ла, ундай һүҙҙәрҙе ундай әҙәмгә теш араһынан сығармаҫ... «Йәнә лә бер шундай уҡ тип, шулай уҡ командир Фәйзуллин; унан ҡотолоу һәм иптәштәренә тәьҫирен өҙөү маҡсатында, ***беҙҙең штабтың*** Мырҙабулатов һәм уның иптәштәре менән һүҙ ҡуйышыуы буйынса, йәшерен үлтерелгәйне. Был эште уның (Фәйзуллиндың. — Й.С.) иң яҡын дуҫы һәм арҡадашы Хажиәхмәт башҡарҙы; уның үҫен дә һуңынан Эстәрлетамаҡ юлында шулай уҡ үҫенең яҡын дуҫы һәм арҡадашы Сәғитов атып үлтерҙе... ***Беҙ быға ни өсөн барғаныбыҙҙы беләбеҙ,*** ә Мырҙабулатовтың быға ни өсөн барғанлығын был эште Мырҙабулатовтың ҙур хеҙмәте итеп күрһәтеүсе Мортазин

беләме икән һуң (Мортазин китабындағы баяғы иҫкәртмәгә ҡағыла. — Й.С.)? Мырҙабулатов быға шуның өсөн ризалашты, сөнки Унасов, баҡты иһәң, «үтә күпте белгән» һәм унан ҡотолоу уның туранан-тура ниәтенә кергән»... Былары ла үтә шикле. Сөнки ҡыйыу һәм бирешмәҫ Хажиәхмәт Унасовҡа, хөкүмәт яғы үҙен бер ниндәй эҙәрлекләүһеҙ ярлыҡап торғанда, үҙе өсөн ытырғаныс ҡырғын ғәскәренең штабына ярамһаҡланып, иң яҡын дуҫы һәм арҡадашын (Фәйзуллинды) атып үлтереүҙән һис ниндәй мәғәнә юҡ. Сәғитовҡа ҡарата ла шуны уҡ әйтә алабыҙ. Йәнә килеп, ҡабатлайым, башҡаларҙан айырымланып иң артта ҡалыусы санала Х.Унасовты үлтереп ташлап китеүҙе лә кисәге «бандит» Сәғитовҡа ышанып тапшырмаҫтар. Сөнки тиҫтәләгән йылдарҙан һуң да Ашраповтың Мырҙабулатовҡа, Сәғитовҡа, Мортазинға теш ҡайрауы, ағыулы һулышын бөркөүе һүрелмәгән, был уның яҙмаларында ярылып ята. Сөләймән Мырҙабулатовтың да «үтә күпте белгән» арҡадашының Эстәрлетамаҡта кинәт теле сиселеренән һис ҡурҡыр урыны юҡ. Сөнки әгәр Хажиәхмәт Унасовтан Мырҙабулатов йәки Сәғитов тураһында «күпте» һөйләтергә теләһәләр, уны юлда симоновсылар үҙҙәре үк үлтертмәҫтәр, ә, күҙ ҡараһындай ҡурсалап, тиҙерәк алып ҡайтып еткереҙәр ине БЧК ҡарамағына. Юҡ, юлда уҡ юҡ итеү булған юғарынан бойороҡ һәм уларҙың, Симонов ҡырғынсыларының, иҫәбе һәм тап улар үҙҙәре үлтергәндәр ҙә. Моғайын, үҙ ҡулдары менән. Ашрапов үҙе үк танып тора бит быны: ***«Хажиәхмәт юлда беҙҙең тарафтан үлтерелде».*** (ЦГАОО Р.Б., ф. 1832, оп. 3, д. 116, л. 3, 4 һәм д. 112, л. 42, 43). Бөтә шөбһәләрҙе юҡҡа сығара был.

* * *

2010 йыл. Нигәйәт, урындағы хөрмәтле эҙәрмәндәр -- Сибай ҡалаһынан Тәлғәт Әхтәм улы Солтанов, А.М.Ҡәйепҡолов һәм Баймаҡтан Р.М.Асылбаев уҙамандарҙың ярҙамында халыҡ батыры Х.Ғ.Унасовтың үлем фажиғәһе һәм

урыны теүәллекле асыҡланды, киләсәктә ул урынға иҫтәлекле билдә ҡуйылыр, тигән өмөт бар.

ИКЕНСЕ БҮЛЕК

Ҡанлы йылдар юлынан

Билдәле булыуынса, үҙәк Совет Хөкүмәте (Мәскәү) Башҡорт автономияһын бөтөрөүгә тәғәйен юҫыҡланғас ("Автономиялы Совет Башҡорт Республикаһының дәүләт төҙөлөшө" тураһындағы 1920 йыл 19 май ҡарары), быға ризалыҡһыҙ Әхмәтзәки Вәлидов етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәте ағзалары вазифаларын ҡалдырып таралыша һәм Мәскәү тарафынан республикала автономияның хас дошманы Ғәли Шәмиғоловтың ҡанлы диктатураһы урынлаштырыла, палач Поленов үҙенең бихисап вәхшәттәрен тап шул диктатор бойороғо һәм ярлыҡауы буйынса башҡара ла инде. Аҙаҡ килеп Бөрйән-Түңгәүер кантонындағы үлемесле ваҡиғаларҙы тикшерергә партия өлкә комитеты һәм БашЦИК тарафынан ебәрелгән тәфтишсе Н.Бикбаев: "В Стерлитамаке отдельные товарищи, в частности т.Шамигулов Гали, не были согласны с линией Обкома и аппеллировали в ЦК партии. Они оправдывали контрреволюционное действие Поленова, Руденко и др. бандитов с партбилетом" (ЦГАОО РБ, ф.1832,оп.4, д.397, л.133), -- тип яҙһа ла, күрәләтә енәйәтселәрҙе Мәскәү йәһәт ярлыҡай, башҡа юғары вазифаларға тәғәйенләй. Сөнки большевиктарҙың "пролетариат диктатураһы"н рәхимһеҙ бойомға ашырыуҙы һәр төрлө шәмиғоловтарға, поленовтарға тап шул ҡанлы 1920 йылда ("Коммунистический интернационал" журналының 1920/ноябрь һанындағы "К истории вопроса о диктатуре" тигән мәҡәләне ҡарағыҙ) юлбашсыбыҙ В.И.Ленин үҙе туҡып өйрәтте һәм талап итте: "Диктатура означает – примите это раз и навсегда к сведению... – неограниченную, опирающуюся на силу, а не на закон, власть... Неограниченная, внезаконная, опирающаяся на силу, в самом прямом смысле слова, власть – это и есть диктатура"

(Ленин В.И. Полн.собр.соч.т.41, с.376,380). Йәғни пролетариат диктатураһын урынлаштырыуҙа көс ҡулланығыҙ, законһыҙ эш ҡылығыҙ!

Күп йылдар буйына башҡорттарға В.И.Ленин “үҙе бүләк иткән автономия” тураһында күркәм һүҙ барҙы, ләкин был ялған ине. Һөжүм итеүсе аҡ ғәскәрҙәр большевиктар хакимиәтенең башына етергә торғанда, башҡорт ғәскәрҙәрен аҡтарға ҡаршы ҡуйыр өсөн, В.И.Ленин партияһы Башҡорт автономияһын ваҡытлыса ғына танырға мәжбүр булғайны, ләкин шарттар үҙгәреү менән үк баяғы май айы ҡарарын ашығыс иғлан ҡылды... Шәмиғоловтың үҙ ҡулы менән тултырған рәсми анкетаһында ысын маҡсаттары асыҡ күренә: “С кем из руководителей КПСС Вы встречались и при каких обстоятельствах? – Товарищем Лениным В.И. по личному его вызову в Москву в 1918 г., т.т.Свердловым, Куйбышевым, Фрунзе, Сталиным по вопросам становления Советской власти в Башкирии, по вопросам проведения национальной политики партии и встречи на съездах и Советах” (ЦГАОО РБ, ф.9776, оп.2, д.1306, л.11). Ана шул шанлы “становления” барышында Автономиялы Башҡорт республикаһын башҡорттарҙан ҡырсып-таҙарта башлаған яуызлыҡҡа ҡаршы башҡорт халҡы 1920 йылда уҡ баш күтәреп, Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов етәкселегендә ҡораллы көрәш башлай һәм, күп ҡорбандар биреп булһа ла, автономияны, халыҡты һәләкәттән һаҡлап алып ҡала. Тап шул ихтилал арҡаһында башҡорт халҡына ҡарата Мәскәүҙең ҡарашы ҡырҡа үҙгәрә, урыҫлаштырыла һәм татарлаштырыла башлаған республикала етәкселеккә башҡорттар үрләтелә (партия өлкә комитетының беренсе секретаре итеп -- Әхмәҙулла Биишев, Дәүләт башлығы итеп – Муса Мортазин, Хөкүмәт башлығы итеп Хафиз Ҡушаев һ.б.), башҡорт теле, урыҫ теле менән бер ҡатарҙан, республиканың дәүләт теле итеп ҡабул ҡылына (был тарихи ҡаҙаныштар 1937 йылғы Сталин репрессиялары осоронда юҡҡа сығарыла). Ләкин бөйөк ихтилалдың алғы сафтарында барған, үлемесле алыштарҙа халҡы өсөш башын һалған

батырҙарыбыҙҙың күбеһенең, шул иҫәптән ихтилалсылар армияһының дивизия командиры Хажиәхмәт Ғәбиҙулла улы Унасовтың, яҡты исемдәре һәм эштәре, баяғы билдәле сәбәптәр арҡаһында, тиҫтәләгән йылдар буйына иҫкә алыуҙан тыйылып йәки ҡараға буялып, халыҡ хәтеренән юйылыуға дусар ҡылынды. Был томанды йырып сығырға ҡайһы бер ынтылыштар, шул иҫәптән ошо юлдар авторыныҡы ла (Йыһат Солтанов. Сөләймән Мырҙабулатов: заманы һәм көрәше. Китап, Өфө -- 2006), әлбиттә, бөтәһен иңләй алмай, -- күп исемдәр, ваҡиғалар билдәһеҙ ҡала бирҙе. Тәғәйенерәк әйткәндә, тарихыбыҙҙағы томаналыҡты бөтөрөү хаҡына Хажиәхмәт батырҙың да һуңғы көнөн, төҫ-киәфәтен асыҡлайһы бар ине, шул йәһәттән, урындағы халыҡ араһында белешмәле эшмәкәрлек йәйелдереп, Сибай ҡалаһынан билдәле табип Тәлғәт Әхтәм улы Солтанов, Баймаҡтан урман хужалығы ветераны Ринат Миҙхәт улы Асылбаев кеүек изгелекле, егәрле уҙамандар, ихласланып авторға ныҡ ярҙам итте.

Р.М. Асылбаев Тәкәһуҡҡан юл сатында

“Мин һатыусы булып эшләгәндә, -- тип яҙа бер хат авторы Шәмсигариф ағай Янышев (Ҡарамалы ауылынан) -- Сибай базаһына тауарға йөрөй торғайныҡ. Юлға сығып голосовать итеп, машинаға ултырып китәбеҙ. Шунда мин өс мәртәбә Хәйбулла районынан бер бензовозға әләгеп киттем, шоферы һөйләп барҙы: “Бынан Байыш ауылы яҡынмы, ул ҡайһа яҡта? Минең олатай Унасов менән бергә йөрөгән, дуҫ булғандар. Шул батырҙың туғандарын барып күрергә ине; [Унасов] атайым менән бергә фотоға төшкән һәм башҡа фотолары ла бар”. [Был шоферҙың] ауылын һәм исемен онотҡанмын инде; “Хәйбулла районының гранында торабыҙ – Ырымбур өлкәһе беҙҙән 2-3 километр ғына”, ти ине...”

Тәлғәт уҙаман, был кешене эҙләтеп, Хәйбулла район гәзитенә яҙып ҡарағас, ауылдың Ҙур Арыҫланғол икәне асыҡланһа ла, шоферҙы таба алмағандар – ҡайҙалыр ситкә киткән... Әммә Хажиәхмәт батырҙың үҙен күреп белгән ауыл ҡарттары, уның бер туған ҡустыһы Дауыттың ейәне Зәйнетдин тураһында: “Бына ул – һуйған да ҡаплаған Хажиәхмәт!” – тип әйтер булғандар (бәлки, киләсәктә рәссамдарға был мәғлүмәттең кәрәге тейер).

Нурулла һәм Миңзәлә Ҡолһариндар ғаиләһендә. Үрге Нуғай

Тынғыһыҙ йән Ринат Миҙхәт улы үҙенең һөнәрҙәше -- Үрге Нуғай ауылындағы атаҡлы урмансы һәм һунарсы (үҙ ғүмерендә алтмыш бүре, ун алты айыу алған), тарихи ваҡиғалар урынын яҡшы белгес Нурулла Нуриман улы Ҡолһаринды ла изге эшкә ылыҡтырып, ныҡ ярҙамы тейҙе. Әйткәндәй, бынамын тигән балалар үҫтереүсе киң күңелле был ғаиләнең юғары зауыҡлы тормошон күреп һоҡландыҡ: туған тәбиғәттең матурлығын йәндәй ҡәҙерләп ҡурсалаусы Нурулла уҙаман үҙенең алсаҡлығы, йорлоғо менән арбаһа, хәләл ефете Миңзәлә ханым күркәм шиғырҙар яҙа, һәләтле бер композитор уның һүҙҙәренә моңло көй һалған.

Табиплыҡ эше менән бер ҡатарҙан тыуған ерҙең тарихын да мөкиббән китеп юллаусы Тәлғәт Әхтәм улының әүҙемлегенә, тәрән белемле, зауыҡлы булыуына һоҡланам – үҙебеҙҙең дәүләт архивтарынан тыш, Мәскәү, Санкт-Петербург, Иркутск ҡалаларыныҡы менән дә яҙыша, кәрәкле мәғлүмәттәр ала; ә минең өсөн иң ҡиммәтлеһе – үҙе эшләп киткән төбәктәрҙең аҡһаҡалдары, эҙәрмәндәре менән тығыҙ элемтә тотоуы, аралашыуы ине. Әйтергә кәрәк, уның менән бәрәкәтле танышыуым баяғы китабыма бәйле килеп сыҡты ла инде. Эш шунда: Башҡорт Совет Автономияһының тәүге йылдарындағы рәсми ҡағыҙҙарҙың күбеһендә кешеләр, инициалдары күрһәтелмәй, фамилиялары менән генә йәки улары ла ҡыҫҡартып теркәлгәнлектән һәм ҡайһы берҙә Мырҙабулатов фамилияһы Булатов рәүешле яҙылғанлыҡтан, Тәлғәт уҙамандың шанлы олатаһы М.Ғ.Булатовҡа ҡағылышлы ҡайһы бер урындарҙы С.Ш.Мырҙа-Булатов хаҡында тип ҡабул ҡылып аймылғанмын булып сыҡты һәм, итәғәтле серҙәшем был мәсьәләне аныҡлап биргәс кенә, 1917 йылдан РКП(б) ағзаһы, республикабыҙҙың физакәр дәүләт эшмәкәре, ләкин тарихсыларыбыҙ иғтибарынан ситтәрәк ҡалған Мөхәмәтйән Ғәлиулла улы Булатовтың яҙмышы үҙе бер донъя булып асылды. Өҫтәүенә, заманында Бөрйән-Түңгәүер

Һулдан Ситдиҡа, Әүхәзи Ғүмәровтар

кантон башҡармаһында М.Ғ.Булатов менән бергә эшләгән һәм палач Поленов язаһына ла бергә дусар булған Әүхәҙи Ғүмәровтың тол ҡалмыш ҡатыны Ситдиҡа инәйҙең шул ҡанлы көндәр тураһындағы иҫтәлектәре (быны ла миңә Т.Ә.Солтанов табып килтерҙе) айырыуса тетрәндерҙе, әле алынған темаға ярашлы булғанлыҡтан, бер өҙөгөн бирәйем:

“Иремдең туғандарының береһе: “Эстәрленән хәбәр килгән – уларҙы төрмәнән сығарырға[4]”, -- тип мине шатландырып китте. Мин, иптәшем ҡайтыуға тип, өйҙө йыйыштыра башланым. Кискә табан мин солан баҫҡысын йыуып бөтөрөп торғанда, ҡапҡа асылып китте, ҡапҡанан Нәфисә менән Булатовтың[5] һалдаттан алып ҡайтҡан ҡатыны килеп инделәр. Уларға күтәрелеп ҡараһам, төҫтәре ап-аҡ булған, бик ҡурҡышҡандар ине. “Беҙҙекеләрҙе харап иткәндәр бит, Ситдиҡа йәнем!” – тип илай башланы Нәфисә ханым. “Всех убили”, тип, ҡулы менән муйынын салып күрһәтеп, Тәлғәт лә үкһене. Ә мин бит яңы ғына, иптәштәребеҙ нахаҡ бәләнән ҡотолоп ҡайтыр – тағы шатлыҡлы көндәр күрәһебеҙ бар икән, тип ҡыуанып йөрөгәндә, ҡапыл шундай фажиғәле хәбәр ишетеүемә, таш кеүек ҡатып ҡалдым, илай ҙа алманым, исмаһам...

---

[4] Киреһенсә, ҡанлы Шәмиғолов режимы уларҙы юҡ иттертергә юҫыҡланған.

[5] Таҫыллы дәүләт эшмәкәре Мөхәмәтйән Ғәлиулла улы Булатов.

Кантон етәкселәре атылған төрмәнең таш диуар ҡалдыҡтары

Бераз ваҡыт үткәс, баламды күтәреп, Камил Мусиндарға киттек. Улар ҙа, был насар хәбәрҙе ишетеп: "Ситдиҡа ишетеү менән беҙгә килер инде, бахырҡай, уның беҙҙән башҡа бер кеме лә юҡ бит", тип, Зөләйха ханым мине көтөп кенә тора ине; сығып, моңло ғына итеп мине ҡаршы алды. Мин, өйгә ингәс, баланы иҙәнгә ултырттым да үҙем дә иҙәндәргә аунап, үкһеп-үкһеп, туйғансы иланым, Зөләйха ханым да ҡушылды.

Күп тә үтмәне, Хәләлкәрйә мине әҙләп Зөләйхаларға килеп инде. (Уны, Гликерьяны, Мөхәммәтйән Булатов армияла йөрөгәнендә алып, ауылға ҡайтҡас Хәләлкәрйә тип исем ҡуйҙырған икән; ул үҙе мосолман диненә инергә риза булып, әйәреп ҡайтҡан урыҫ ҡыҙы ине).

Беҙ уның менән хәҙер үк Баймаҡҡа китергә[6] *булып, Нәфисәләргә барҙыҡ. Нәфисәнең атаһына үтенеп, беҙҙе атың менән Баймаҡҡа алып бар, күпме һорамаң да бирәбеҙ, тинек. Ул ризалашманы: "Унда барып, ҡанда йөҙәр хәлем юҡ, һеҙгә лә барырға кәңәш бирмәйем, Нәфисәгә лә барырға рөхсәт итмәйем", -- тине. Беҙ уларҙан сығып китеп, ат әҙләргә тотондоҡ. Күн заводына ла барҙыҡ. Ахырында Әбүбәкер мулла Хөсәйеновтан башҡа өйҙә торған*

---

[6] Ирҙәре эшләп йөрөп ҡулға алынған кантон үҙәге Темәстән.

Мәхфи еңгәйгә индек. Ул еңгәй үземде байтак якын күргән булһа кәрәк – беҙгә каршы булманы. Үҙе карап үҫтергән, Юныс тигән 13-14 йәшлек кенә баланы күсер итеп бирҙе лә юлға сығарып ебәрҙе.

Ул көндә беҙ Иҫән тигән ауылда туктап, укытыусы өйөндә кундык. Иртәгәһен иртәрәк сығып китеп, төш вакыттарында Дәүли ағайҙарҙың капкаһына барып еттек. Күсер арбанан төшөп, капка асып, беҙҙе капканан индереүенә, ишек алдында капканың уң ягына өйөп куйылған күп кенә оҙон ағастар өҫтөнә йәйелеп яткан, канға батҡан Әхмәҙиҙең һаргылт төҫтәге костюмы менән жилеткаһын абайланым. Мин коропһоҙ (тирәсһеҙ) хадук арбала аяктарымды һалындырып олтыра инем. Костюмдарҙы күргәс, алдымда бала барын да онотоп, арбанан нисек төшкәнемде лә һиҙмәй, барып костюмды косаклап алып, иҫем китеп йығылғанмын. Хәләлкәрйә ерҙә аунап илап яткан баланы күтәреп алып, өйгә йүгергән. Шәмси апайҙар йүгереп сығып, мине үлгән тип куркып, битемә һыуҙар бөркөп, өйҙәренә алып инделәр. Байтак ятып хәл алғас, Дәүли ағайҙарҙан фажиғәле эш тураһында һораша башланым. Улар ошолай итеп һөйләне:

"Беренсе август (дөрөҫө 31 июль. – ред.) көндә кискә табан тоткондар таш һарай янындағы коҙок янына сығып, коҙоктан һыу алып, береһе икенсеһенә һыу койоп тороп һабынлап йыуынып, ак һөлгөләргә һөртөнөп, һарайға инеп киттеләр. Бераҙҙан барыһы ла, ак күлдәктәр кейеп сығып, һарай янындағы бүрәнәгә теҙелешеп олтырҙылар. Һөйләшеп-көлөшөп бераз олтырғас, һаксылар уларҙы индереп һарайҙы биклап алды.

Төнгө сәғәт икеләрҙә урамда каты атыш тауыштары ишетелгәс, уянып, парадный ишек ярығынан караһак, таш һарай янында күп кешеләр йөрөнә. Һарай алдында Ай яктыһында ап-ак нәмәләр күренә, аһ-ух килгән ыңғырашыуҙар ишетелә -- бисаракай Әхмәҙиҙең тауышын танып торҙок. Ул бик оҙак вакыт, Алла, Алла, тип кыскырып ятты, һуңынан уның да тауышы баҫылды. Шул арала Ай яктыһына Көн яктыһы кушылып яктырып китте; оҙакламай катындар көтөүгә һыйырҙарын кыуа башланы. Улар һарай янында ап-ак күлдәктәре кызыл канға буялып үлеп яткан кешеләрҙе күреп, кыҙганышып илап торгандарын күргәс, һаксылар

уларҙы ҡыуып ебәрҙеләр. Оҙаҡламай врач алып килеп, тоткондарҙың үлеп етеүҙәрен әйтеп, Руденко менән Поленовты тынысландырғас, шәһиттәрҙе шахта сокорона алып барып ташларға ҡуштылар. Кешеләр күп йыйылып киткәс, мин сыҡтым да, рөхсәт һорап, 6 (алты) кешене үҙем күмдерәм, тип, киң таҡта арбаны атҡа егеп урамға сыҡтым, 3-4 бабай менән барып, зыяраттың бирге яғындағы киң генә, күмелгән иҫке шахта сокоро бар икән – шуны көрәктәр менән уңайлаштырып, ***Әхмәзи Ғүмәровты, Билал Ғабдрахмановты, Мөхәмәтйән Булатовты, Дулат-Али*** *тигән бер егетте шул киң сокорға теҙеп һалып, өҫтәренә кейем-һалымдарын яптыҡ та күмеп ҡуйҙыҡ.* ***Тартышев*** *тигән урыҫ егете менән* ***Кузнецовты*** *икеһен бер сокорға ерләнек", -- тине Дәүли ағай. Дәүли ағайҙан шул һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡулдарын үбеп иланыҡ. Һәм унан иптәштәребеҙҙең ҡәберен күрһәтеүҙе үтенеп һораныҡ.*

Уңдан – олатаһы М.Ғ.Булатов ерләнгән зыяратта Т.А.Солтанов

Ул ағай беҙҙең был теләгебеҙгә риза булманы: "Юҡ инде, мин унда бара алмайым, сөнки ул яҡта бик ҡуркыныс, ул яҡҡа мал ҡараға барыусыларҙы ла атып үлтерәләр", -- тине. Беҙҙе хәҙер бер нимә лә ҡуркытмай, атһалар-атырҙар, тинек тә иптәштәребеҙҙең

кәберҙәрен әҙләргә киттек. Ағай өйрәтеп ебәргәнгә күрә бахыркайҙарҙың кәберҙәрен табып алдық. Мин ҙур сабырлық менән үҙемде кулға алып, үкһеп илауҙан тыйылдым. Ә Хәләлкәрйә, үҙҙәренең гәҙәте буйынса, кәберҙе косаклап ятып, кысҡырып-кысҡырып көйләп иларға тотондо...

Шул арала Ирәндек тауы яғынан һыбай кешенең Баймак яғына килеүе күренеп калды. Мин уны күреү менән кайтып китергә ашыктым. Тик Хәләлкәрйәне кәбер өстөнән айырып ала алмай бик аптыраным. Һис тә булдыра алмағас, баламды күтәреп кайтыу яғына әйләндем. Мин бераҙ киткәс, ул да көйләп-көйләп илап артымдан килеп етте. Беҙ кайтканда тау өстөндәге калкып-калкып торған таштар артында мылтыклы кешеләрҙең боҫоп ултырғандарын күрһәк тә, улар беҙгә теймәне.

Шулай итеп, беҙ өйгә кайтҡан булдық. Ләкин әле һаман беҙҙең күңелдәр баҫылманы.

Беҙ инде Руденко менән Поленовтың урынлашҡан кантураһына барып, иптәштәребеҙҙең кейемдәрен һорамаҡсы булдық. Баймакта[7] сиркәү бар, уны, ҙур урын биләп, койма менән әйләндереп алғандар. Шул койманың эсендә -- Баймак заводының элекке хужаһы Кабановтың ҙур-ҙур йорттары. Сиркәү капҡаһынан инеп, аҙ ғына баргайныҡ, тәҙрәнән күреп калдылар, ахыры: 4-5 хәрби кеше бер өйҙөң болдор баҫҡысынан һикерешеп төшөп, яныбыҙға килеп, әйләндереп алдылар. "Һеҙ кем, ни өсөн бында килеп йөрөйһөгөҙ?" – тип һоранылар. Үҙебеҙҙең кем икәнебеҙҙе әйттек. Мин өйгә тентеү яһағанда алған нәмәләрҙе һораным, баламды күрһәтеп, атаһының пальтоһын, хром итектәрен һораным. Балага на память булыр ине, тинем. Улар был һүҙемдән көлдөләр генә. Беҙҙең кемгә фатирға төшөүҙе һоранылар. Беҙ, Яуышев Дәүли тигән кешегә, тигәс, Поленов беҙгә: "Вы арестованы!" – тип, бер кыҙыл әрмисте әйәртеп, беҙҙе, бер кайҙа ла сығармай, ашаттыртмай, Дәүли ағайҙың өйөндә һаҡларға кушты.

Дәүли ағайҙар беҙҙе һаҡсылар менән күреп куркышты, мин бер ҙә үлемдән куркманым. Апайға әйттем: "Сәмси апай, моғайын,

---

[7] Буласаҡ №1 мәктәп урынында.

беҙҙе төндә алып сығып атырҙар инде, тик һеҙгә бер үтенесем шул: әгәр мине атып, Риза улым тере ҡалһа, һеҙ уны Пластағы минең туғандарыма тапшырығыҙ; улар уны үҫтереп, үкытып, кеше итһендәр. Әбделнасирға ебәрмәгеҙ, унда ебәрһәгеҙ, унда көтөүсе генә булып ҡалыр, -- тинем. -- Әгәр уны үҙемдең күкрәгемә ҡуйып бергә генә атһалар, донъяла бер үкенесем дә ҡалмаҫ ине", -- тинем.

Кис булды, беҙгә ашатманылар. Ишек төбөндә мылтыҡлы һаҡсы ултыра. Сәмси апай төпкө йоҡо бүлмәһенә беҙгә урын һалып бирҙе лә, балаға әсер, тип, бер стакан һөт тотторҙо.

Аҙырақ йоҡлап киткәнбеҙ. Бер ваҡыт парадный ағындағы ишекте бик нык ҡаҡҡан тауышҡа йөрәгебеҙ ярыла яҙып уяндыҡ. Дәүли ағай тороп, ишеккә сығып китте, беҙ тертләп тороп ултырҙыҡ.

Бераҙ һөйләшкәс, Дәүли ағай өйгә инде. Беҙгә ул, һорамаһаҡ та, үҙе килеп әйтте: "Темәстән кантонлыҡ күсеп ята икән, шунан килгән таныш иптәштәр фатир һорап килгәндәр. Һеҙҙең беҙҙә икәнде әйткәс, улар: "И бисараҡайҙар, мында килеп еткәндәр икән, беҙ уларҙы борсомайыҡ инде, башҡа кешегә барайыҡ, тип киттеләр", -- тине. Мин шул ваҡыт йомшап китеп, беҙҙе лә ҡыҙғанған яҡшы кешеләр бар икән әле, тип, таң аткансы иланым.

Таң атты, Ҡояш бераҙ күтәрелгәс, өйгә тағы мылтыҡлы бер кеше килеп инде лә беҙҙе һаклаған һаҡсыға кеҫәһенән сығарып бер ҡағыҙ бирҙе. Уныһы, ҡағыҙҙы үкығас, Дәүли ағайҙы саҡырып алып, беҙҙе уға тапшырып китәсәген әйтте. Әгәр быларҙы ҡасырһаң, башың менән яуап бирәсәкһең, тип, ағайҙан ҡул ҡуйҙырҙты ла үҙе теге егет менән сығып китте. Улар киткәс, Сәмси апай беҙҙе яҡшылап туйҙырып алды.

Ул көн дә үтте, беҙҙе оноттолар, ахыры. Хужалар ашаталар ҙа ул, ләкин беҙҙе алып килгән аттың хәле мөшкөлләнә башланы. Кәртә башынан ҡарайған бесән, һыныҡ-һаныҡ икмәк, аҙырақ он болғатып биргән һыу менән генә ат тотоп булмай бит, ә ҡырға сығарып ашатырға мөмкин түгел. Беҙҙе алып килгән бала көн буйы илауҙан бушанмай. Аптырағас, Дәүли ағайға әйттем: "Ағайым, һин Поленовҡа бар. Беҙҙең хәлде, аттың хәлен әйт, бүтән мин уларҙы туйҙырып тота алмайым; йә, пропуск биреп, Темәскә ҡайтарып

ебәрегеҙ, йә үҙ ҡарамағығыҙға алығыҙ, тип әйт, тинем. Дәүли ағай хәлде барып һөйләгәс, улар беҙҙе, үҙҙәре килһен, тип ҡайтарғандар.

Беҙ, ағайҙар, апайҙар менән хушлашып-бәхилләшеп, кәфенде муйынға ураған дай булып сығып киттек.

Беҙҙе ҡаршылап, кантураларына алып инделәр ҙә кем икәнебеҙҙе һораша башланылар: ниндәй милләт, кем булып эшләү йәки эшләмәү һ.б. Мин уҡытыусы булып эшләүем, татар икәнемде әйткәс, улар: "Ни өсөн башҡортҡа барҙың, татар тапманыңмы?" – тинеләр. Яуап бирмәнем.

Хәләлкәрйәне һораша башланылар: ул үҙенең урыҫ милләте икәнен әйткәс, уны төкөрөнә-төкөрөнә әрләнеләр ҙә, миңә обыск ваҡытында алынған алты аршин туҡыма тауарымды ғына биреп: "Башҡаса ирҙәрегеҙҙе юллап килеп йөрөмәгеҙ, әгәр бик тә һағынһағыҙ, үҙегеҙҙе лә улар янына олаҡтырасаҡбыҙ!" – тинеләр ҙә Темәскә ҡайтыуға пропуск яҙып бирҙеләр. Беҙ ағайҙарға ҡайтып тамаҡ туйҙырҙыҡ та, асығып торған атты егеп, ағай менән апайға меңрәхмәттәр уҡып хушлашып, юлға сығып киттек. Баймаҡтан 2-3 саҡрым ер үткәс тә атыбыҙ арыны, уны ситкә алып сығып туғарып, туйҙырғансы утлаттыҡ..."

Баймаҡ районының тарихи урындарын иркенләп йөрөп күреү теләгем ҙур ине, киң күңелле Тәлғәт уҙамандың һәм йомарт ҡуллы хәләл ефете Фәүзиә ханымдың үҙҙәренә ҡунаҡҡа саҡырыуын ҡыуаныслы ҡабул ҡылып, яҡшы ойоштороған сәйәхәтемде хужаның еңел машинаһында үҙем теләгән тарафтарға йүнәлтеп, теләгән кешеләрҙе күреп, моратыма ирештем. Бына Баймаҡтың Л.А.Азанов (1918 йылда автономиясы башҡорт яугирҙәрен аттыртҡан бәндә) һәм Почта урамдары сатлығында элек палач Поленовтың штаб-квартираһы булған 22-нсе һанлы йорт алдында баҫып торабыҙ, тап ошонда күпме халыҡты язалап үлтергәндәр ҙә мәйеттәрен элекке ҡала администрацияһы урынлашҡан бина эргәһендәге шахтаға быраҡтырғандар (шундағы 1-се һанлы мәктәп алдында баяғы Азановҡа ҙур һәйкәл ҡуйылған). Ҡанға һыуһаған поленовсыларҙың йыртҡыстарса ҡотороноуы дәүләттең рәсми ҡағыҙҙарында сағыла:

«БССР-ҙың ҡайһы бер яуаплы эшмәкәрҙәренең уголовный енәйәттәрен тикшереү буйынса БЦИК янындағы махсус тәфтиш комиссияһының һығымталары.

Копиялары: РКП Үҙәк Комитетына, Юғары Чекаға, РКП-ның Башҡортостан Өлкә комитетына, БашЦИК-ка һәм ВЦИК янындағы Башвәкәләтлеккә.

БЦИК тәфтиш комиссияһының вәкәләтле ағзаһы Н.Бикбаевтың доклады.

Бөтә Башҡортостанды, тип әйтерлек, шундайын да йөрәкһеткән енәйәттәрҙе урындарында тикшереп, мин уларҙың фәҡәт факттарын ғына алырға тырыштым. Хәҙер шуларҙы ошо докладта килтерергә теләйем.

РКП Башобкомының һәм Всебашчеканың вәкәләтлеһе[8] Поленов үҙ эшенең беренсе көндәренән үк һиҙелерлек рәүештә үҙенең енәйәттәрен йәйелдерә башлай. Халыҡ тормошон һәм әхләгән аңламаҫтан, ерле сәбәптәр менән бөтөнләй иҫәпләшмәҫтән, ҡара ниәттәрен бойомға ашыра.

Ул төбәктең, Поленов енәйттәре бигерәк тә ныҡ сағылған Бөрйән-Түңгәүер кантонының, башҡорттары күсмә тормошта йәшәй. Улар бөтә йәй буйына, һыбай йөрөп, үҙ мал-тыуарҙарын көтә далала. Ҡышлауҙарына иһә башҡорттар бик һирәк ҡайтып әйләнә.

Һәм бына Поленов, БССР үҙәгенән вәкәләтле булып, Бөрйән-Түңгәүер кантонына килә. Кантонда иһә бөтәһе лә тыптыныс. Поленов тарафынан контрреволюцияға һәм бандитлыҡҡа ҡаршы көрәш буйынса хәрби кәңәшмә булдырыла һәм бөтә хакимиәт тулыһынса шул хәрби кәңәшмә ҡулына туплана. Бөрйән-Түңгәүер канткомы рәйесе Хоҙайбирҙин иптәш һәм шул уҡ кантон башҡарма комитеты ағзаһы Кузьмин иптәш иҫтәрен йыйып һәм эштәрҙең барышын күҙ уңында тотоп, Поленовтың был ҡылығына ҡаршы нәфрәт белдерәләр. Бер нимәгә лә нигеҙләнмәгән ҡулға

---

[8] Бындай вәкәләтлелек элегерәк С.Ш. Мырҙабулатовҡа бирелгәйне һәм ул нәҡ ошо Поленовты яуыз дошман рәүешле фашлағайны.

алыуҙар башлана. Ҡулға алынғандарҙы урта быуаттарҙағыса һәм иҫке режимдағыса язалайҙар. Аяҡтарына үтәнән-үтә штыктар ҡаҙайҙар һәм үлем сигенә еткереп ҡамсылайҙар. Резеденцияһын үҙ белдеге буйынса Темәс ҡалаһынан Баймаҡҡа күсереп, Поленов үҙенең енәйәттәрҙә ҡатнашсылары — Бөрйән-Түңгәүер кантон Комдезертир рәйесе Руденко, милиция башлығы Курочкин һ.б. менән Баймаҡта дауамлай ҡанлы эшен. Террорсылыҡ бында тулы мәғәнәһендә ҡотора. Ырымбур вәкәләтлеһе Ҡапҡаев тарафынан ҡулға алынған һәм Поленовҡа тапшырылған Бөрйән-Түңгәүер кантисполком ағзалары коммунистар Абдрахманов, Булатов[9], Ғүмәров, Дулат-Али, Кузнецов һәм халыҡ хөкөмдары (судъя) Тартищев бөтәһе бер төндә хөкөмһөҙ һәм тәфтишһеҙ атып үлтерелә. Был саҡта инде дезертирҙарҙың бәләкәй шайкалары барлыҡҡа килә башлай. Был иһә тап Поленовтың ҡылыҡтарына бәйле.

Үҙҙәренең көтөүҙәрен көткән тыныс тормошло башҡорттар ҡырҙан тотоп алып Баймаҡҡа килтерелә һәм хөкөмһөҙ, тәфтишһеҙ атып үлтерелеп, киҫәктәргә тураҡланып, шахталарға быраҡтырыла. Аттан саҡтарҙа уларҙың ғәйеплеме, әллә түгелме, кесе йәштәгеме, әллә оломо икәнлектәрен дә тикшереп тормағандар, шулай итеп 10-12 йәшлек балалар — сабыйҙар һәм сал сәсле ҡарттар атылған, мәйеттәре дөйөм өйөмгә шахталарға быраҡтырылған. Былар бөтәһе халыҡ араһында Поленовҡа, Руденкоға һәм Курочкинға һ.б. айырым шәхестәргә ҡаршы оло уҫаллыҡ тыуҙыра. Нәфрәтлеләр асыҡ көрәшкә сыға. Ауырыу сәбәпле фронттарҙан һәм тыл ғәскәри бүлектәренән ялға ҡайтарылған ҡыҙыл әрмистәр, Поленов һәм уның ҡорҙаштары халыҡҡа ҡылған золомдарҙы күтәрә алмай, баш күтәреүселәр сафына баҫа. Кантондың ҡайһы бер яуаплы эшмәкәрҙәре лә, өҫтә әйтелгәндәрҙе кисерә алмай, баш күтәреүселәр сафына киләләр һәм бәләкәй хәрәкәт инде ысын баш күтәреүгә әүерелә.

---

[9] Мөхәмәтйән Ғәлиулла улы Булатов.

Ихтилалды баҫтырыусыларға
һәйкәл. Баймаҡ

Бөтә яуаплы эшмәкәрҙәр баяғы хәрби кәңәшмә тарафынан мобилизациялана ла мылтыҡ ацтына баҫтырыла. Шуға күрә кантон эшмәкәрҙәренең береһе лә Поленовты үтеп БССР үҙәгенә бара һәм хәбәр еткерә алмай. Кантондың айырым төбәктәренә әтрәттәр ебәреп һәм үҙе гиҙеп йөрөп, Поленов осраған һәр берәүҙе дезертир һанап аулай.

Башҡорттоң ҡышлау ауылына килеп сыҡҡа, Поленов ауылдың барлыҡ башҡорттарын дезертирҙар тип һанай, сөнки улар йәйләүҙәргә киткән дә ҡышлауҙа бер йән эйәһе лә юҡ. Әгәр ҡышлауҙа осраҡлы рәүештә ниндәй ҙә булһа әҙәм күҙгә салынһа, шунда уҡ тотоп аталар. Ылау киҙеүендә йөрөп ҡайтып килгән йәки үҙ йомошо менән китеп барған кеше юлда осраһа, хөкөмһөҙ һәм тәфтишһеҙ рәүештә ҡылыстарҙан тураҡланған йәки ҡамсылап үлтерелгән.

Бер һүҙ менән әйткәндә, террорсылыҡ иң юғары кимәлгә еткерелгән һәм ысын мәғәнәһендә бөтөн кантонға йәйелдерелгән. Әйтәйек, һәр ауылда бер ниндәй ҙә ғәйепһеҙҙән 12-шәр, аҡтыҡ сиктә 5-6 кеше атып үлтерелгән, ә дезертирҙар тураһында әйтеп тә тораһы түгел. Бигерәк тә Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ылыҫы террорланған. Ҡылыҡтарын башҡарғанда Поленов, Руденко, Курочкин һ.б., атып үлтереүҙәр менән генә ҡәнәғәтләнеп ҡалмаҫтан, йәнә мөлкәттәрен дә конфискациялағандар, хатта уларҙың совет хеҙмәткәрҙәренекеме йәки ҡыҙыл әрмистекеме икәнлектәрен дә тикшереп тормағандар. Бөтә таландыҡ мөлкәт, — мин быны талау тип һанайым, сөнки конфискациялағанда акттар төҙөлмәгән һәм тейешле учреждениеларға тапшырылмаған, —

уларҙың үҙҙәре тарафынан оятһыҙ урланған. Шулар араһынан Руденконың бөтә таланған мөлкәтте үҙенең утарына ҡайтарыу ғәҙәте булған. Ауылдарҙан бер-нисә тиҫтәләгән баш йылҡы алып кителгән һәм урыҫ утарҙарына таратылған йәки бөтөнләй Башҡортостан сиктәренән тышҡа ҡыуып алып кителгән дә йонсотолған, зәғифләтелгән мал унда Башҡортостан сиктәрендә йәшәүсе казактарға һәм башҡаларға таратып бирелгән.

Поленов, Руденко, Курочкин һ.б. енәйәтселәр, енәйәт ҡыла-ҡыла, йыртҡыс януарҙарға әүереләләр. Ҡулға алынғандарҙы язалағанда, уларҙың ҡолаҡтарын сәйнәп өҙәләр, аяҡтарына үтәнән-үтә штыктар ҡаҙайҙар һ.б. Үлтерелгәндәрҙең күбеһе ҡылыстар менән тураҡлана ла Баймаҡ шахталарына быраҡтырыла йәки, ҡайҙалыр китеп барылғанда, юлға ташлап ҡалдырыла. Хатта шундай осраҡтар ҙа булған: ҡылыс менән сапҡыланған граждандар тере ҡалған, шахталарға ошолай мәсхәрәләп быраҡтырылғандар ҡасып ҡотолған һәм әле лә тереләр. Бигерәк тә ҡурҡынысыраҡ осраҡ бар: Поленов атып үлтергән граждандарҙы күмеү өсөн 6 башҡорт кешеһе ҡәбер ҡаҙа, быны күреп ҡалған Поленов уларҙы ла атып үлтерә лә шул үҙҙәре ҡаҙған ҡәбергә үк күмдертә. Ҡыҫҡаһы, был ҡанәскес йыртҡыстар ҡылған яуызлыҡтарҙы социалистик дәүләтебеҙ кешеһе күтәрерлек тә, аңына һыйҙырырлыҡ та түгел.

Өҫтә яҙылғандарҙы дөрөҫләргә Бөрйән-Түңгәүер кантонында эшләгәнемдә үҙем таба алған ҡайһы бер материалдарҙы күрһәтәм.

РКП Башобкомы һәм Всебашчека вәкәләтлеһе Поленовтың 1920 йылдың 1 авгусындағы N1 фарманы: тыныс тормошло граждандар, бандиттарҙы өйҙәренә кереткән һәм ашарҙарына биргән өсөн, ошо фарман буйынса атып үлтерелә. Мин уйлайым, тыныс тормошло теләгән бер әҙәм ҡурҡышынан ҡораллы кешегә үҙенең бар байлығын бирергә әҙер, юғиһә уны Поленов фарманында яналған шул уҡ яҙмыш көтә бит.

Бөрйән-Түңгәүер кантисполкомы рәйесе Хоҙайбирҙин иптәштең советтарҙың 2-се кантон йыйынындағы доклады өҫтә яҙылғандар тураһында аныҡ һөйләй һәм уларҙы бер ни тиклем дөрөҫләй.

Поленовтың Коробов, Мокрушин кеүек бер килке ҡатнашсыларының үҙ постарын ташлап ҡасыуы һәм Бөрйән-Түңгәүер кантоныың 4-се партия конференцияһы тарафынан уларҙың партиянан сығарылыуы шул ҡылыҡтар хаҡында асыҡ һөйләй.

Бөтә тикшереү материалдары: утыҙға (30) яҡын эш һәм төрлө граждандарҙың мең ярымға (1.500) яҡын ғаризалары[10] өҫтә яҙылғандарҙың бөтәһен асыҡ дөрөҫләй. Быларҙан тыш, Кантпродкомда һәм Кантсоцобеста етем ҡалған ғаиләләргә пособие талап итеп яҙылған бик күп материалдар бар, уларҙа ата-әсәләрҙең бинахаҡтан атып үлтерелеүе һәм мөлкәттәренең таланыуы белдерелеп, ярҙам һорала.

Кантчека рәйесе һәм йәнә бер-нисә кеше тарафынан Поленовтың һәм Руденконың фатирҙарын кереп ҡарау акты әйтелгән бәндәләрҙең ҡайһындай ҙа ҡанәскестәр булғанлыҡтарын асыҡ һөйләй.

Ҡыҫҡаһы, Поленовтың, Руденконың, Курочкиндың һәм башҡаларҙың енәйәттәрен дәлилләүсе факттар бик күп, шуға күрә был докладта хикәйәләүҙе һәм факттарҙы килтереүҙе киңәйтмәй, өҫтә яҙылғандарҙың бөтәһен йомғаҡлап, түбәндәгеләрҙе әйтәм: мин Бөрйән-Түңгәүер кантонында ике тапҡыр — береһендә Мостовенко һәм Ҡарамышев иптәштәр менән берлектә баяғы баш күтәреүселәр менән тыныслыҡ өсөн һөйләшеүҙәрҙә, ә икенсеһендә уголовный енәйәттәрҙе тикшереү өсөн булып, һәм урындағы ҡайһы бер эшмәкәрҙәр мәғлүм ҡылған факттарҙы ишетеп һәм үҙ күҙҙәрем менән күреп, йәш Башҡортостан өсөн шундайын һыҙлатҡыс ауырға

---

[10] Хәҙерге йәш тарихсыларҙың алдында шул материалдарҙы архивтарҙан эҙләп табыу һәм айырым китап итеп сығарыу бурысы тора.

төшкән баш күтәреүгә бары тик Поленов ҡылыҡтары этәрҙе, тип һанайым.

Бөрйән-Түңгәүер кантоныың хөкөм органдары бик һүлпән булғанлыҡтан, миңә бер ниндәй ҙә аппаратҺыҙ һәм булышлыҡ итеүселәрһеҙ — фәҡәт Всебашчека вәкәләтлеһенең ярҙамсыҺы Ғөбәйҙуллин иптәш менән генә эшләргә тура килде. Бынан тыш, кантондың сәйәси хәле мине башҡа тармаҡта ла эшләргә мәжбүр итте, шуларҙың бөтәһе арҡаһында баяғы бай материал (төрлө граждандарҙың 1.500 ғаризаһы) тикшерелмәйенсә ҡалды. Бынан тыш, кантонда хәрби кәңәшмәнең бер ағзаһы ла ҡалмаған, уларҙан хәрби кәңәшмәнең башҡа фармандары һәм ҡарарҙары тураһында ла белешеп булыр ине.

Кантонға килеүем менән үк мин телеграф аша Башчеканан бер-нисә тәфтишсе ебәреүҙәрен һораным, ләкин уларҙы, ни сәбәптәндер, көтөп ала алманым һәм, гәрсә был миңә йөкмәтелмәһә лә, тәфтишләү өсөн аппарат та төҙөп булманы. Шуға күрә хәҙер, барлыҡ эштәрҙе тикшереп сығыу өсөн, аппарат төҙөү кәрәк, ул эштәрҙе билдәле ваҡытҡа тамамлай алыр ине.

Граждандар үҙҙәренең ғаризаларын биреп, уголовный эштәрҙе тикшереүҙе генә түгел, ә ярҙам итеүҙе лә һорайҙар. Шуға күрә мин тейешле учреждениеларҙың Поленов һәм уның әшнәләренең ҡылыҡтарынан ныҡ ҡазаланған ғаиләләрҙе пособиелар менән тәьмин итеү эшенә ашығыс тотоноуҙарын кәрәкле һанар инем, халыҡты был әхләҡи һәм сәйәси тынысландырыр ине. Тағы шуны өҫтәйем: баш күтәреүселәр өҫтөнән гәрсә ялыуҙар булһа ла, ләкин уголовный характерҙағылары бик аҙ, бөтәһе лә, тип әйтерлек, талау һәм башҡа шундайҙар тураһында.

Насибулла Бикбаев». (ЦГАОО Р.Б., ф. 22, оп. 5, д. 51, л. 18 — 22).

Тап шул дәһшәтле көндәрҙә палач Поленовтың үҙенең дә харам ҡаны ҡойола – палачлыҡ шөғөлөн үтәгәнендә уның ҡорбаны булырға тейешле бер башҡорт уҙаманы уның

ҡылысын тартып алып, палачтың һыңар ҡулып сабып өҙгән. Өҙөлгән ҡул, ҡыҙыл табутҡа һалынып, большевистик революция хаҡына бирелгән изге ҡорбан рәүешендә, Баймаҡ ҡасабаһының майҙан түрендә тынлы оркестрҙа матәм маршы уйнатып ҡәбергә күмелә; “Коммунист” тигән романымда ошо ваҡиғаны файҙаланғанмын.

Был ваҡиға тураһында хәҙерге Әбйәлил районы Асҡар ҡасабаһынан билдәле сәсән Мөғәлләм Мирхәйҙәров ағай авторға ошолай яҙҙы: “Беҙ кисә генә (29.01.1972) һикһән йәштәге Моратшин Абдулла ҡарт менән осраштыҡ, башҡа ҡарттар ҙа бар ине.

Ул Поленов хаҡында бик асыҡ белә.

Баймаҡ районы Ҡуштүбә ауылынан 7 башҡортто атырға алып сыға, улар менән әле генә плендан ҡайтып килгән уҡытыусы *Шаһимырҙанов* та була – бик мыҡты, көслө; герман һуғышында атлы ғәскәрҙә хеҙмәт иткән. Ете кеше араһында: “Былар беҙҙе Темәскә кантон төбөнә еткермәй үҙ хөкөмдәрен ҡылмаҡсылар. Шулай була ҡалһа, тотайыҡ та аймылышайыҡ. Яулашып шәһит үләйек”, -- тиҙәр.

Урғаҙы урамында Х.Ғ.Унасовтың өй урыны һәм мал һарайының таш ҡоймаһы. Һулдан уңға: Таштимерова Факиһа Ғәлиулла ҡыҙы һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Кәримова Фәтхиә Сәхиулла ҡыҙы. Байыш

Атырға булғанда, был ҡаса. Ҡара арғымаҡ менгән Поленов ҡыуып етеп, ҡылысы менән һелтәнә, был ергә ята. Поленов үтеп, боролғас, был тағы аунай; өс-дүрт һелтәнгәс, ҡылысын тартып ала, палачтың уң ҡулын ҡушҡарынан өҙә саба. Икенсегә асыу-көс менән һелтәгәнендә, ҡаяға тейеп, ҡылысы сурт-урталай һына. Нагандан атып үлтерелә Шаһимырҙанов уҡытыусы һәм башҡалары ла. Һорашып яҙып алыусы: **М. Мирхәйҙәров**". Автор менән осрашыуында ул тәүҙә себен эйәләтеп штаб бүлмәһенең мейес башында ятҡан, шунан һуң ҡыҙыл табутҡа һалынған Поленов ҡулының майҙанда матәм митингыһы үткәреп, оркестр уйнатып күмелеүен һөйләне. Гәрсә заманының рәсми ҡағыҙында баяғы башҡорт "учитель Алимгулов" тип аталһа ла (күрһәтелгән архив фонды, л.109), М.Мирхәйҙәров-ҡарый биргән мәғлүмәттең дөрөҫлөгөнә ышанам.

Ихтилал армияһының атаҡлы дивизия командиры Х.Ғ.Унасовтың тыуған ауылы Байышҡа етеп, төбәк тарихын яҡшы белгән зыялы ханым -- Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Фәтхиә Сәхиулла ҡыҙы Кәримова булышлығында Урғаҙы урамын буйлап килеп, батырыбыҙҙың йорт нигеҙен таш ҡойма ҡалдығы менән ҡуша фотоға төшөрҙөк; күрше йортта йәшәүсе һеңлекәш Факиһа Ғәлиулла ҡыҙы Таштимерова ла был өй урыны тураһында яҡшы хәбәрдар икән.

Ҡанлы көрәш барышында Шәмиғолов режимы түңкәрелеп, Совет хөкүмәте менән һөйләшеп килешеү һөҙөмтәһендә ихтилалсыларҙың төп өлөшө ҡорал һалып, советтар яғына сыҡһа ла, дивизия командирҙары Х.Унасов, Ф.Мәғәсүмов һәм ҡыр командирҙарының бер килкеһе, килешеүҙең хаҡлығына ышанмай, советтарҙан изгелек көтөп булмай, тип, төбәктә тороп ҡала; Симонов бригадаһы менән ҡуша хөкүмәттең махсус өгөтләү комиссияһы Темәскә килеп һөйләшкәс кенә, баяғы командирҙар ҡорал һалырға һәм Эстәрлетамаҡҡа ҡайтырға ризалаша, әммә Темәстән сыҡан

юлдың дүртенсе саҡрымында уҡ ете ялан командирын судһыҙ-ниһеҙ аталар (ошоғаса был урында иҫтәлекле билдә юҡ), был хаҡта рәсми документ ошолай һөйләй: “Отдельные товарищи, в частности т.Симонов, допустил большую ошибку, которая чуть не привела к новым конфликтам. Из главарей бандитов было арестовано (дөрөҫ түгел: үҙ ризалыҡтары менән ҡорал һалған. – Й.С.) 7 (семь) человек. Тов. Симонов отправил означенных бандитов в Стерлитамак, как он информировал кантком, но оказывается, как было выявлено потом, фактически т.Симонов дал распоряжение своему подчиненному комиссару батальона т.Чиркову расстрелять их дорогой... Тов. Чирков, когда мы потребовали объяснений, почему он расстрелял, ответил, что он выполнил приказ своего начальника Симонова” (күрһәтелгән архив фонды, л.138). Ә советтарҙың Польша фронты ҡаһарманы, Унасовтың яугир арҡадашы Зәйнуллин иһә шунан бер көн генә элгәре Баймаҡ янында мәкерле үлтерелә, ошо хаҡта Симоновтың үҙ һүҙҙәре фәһемле: “В бытность мою в Баймаке мне удалось узнать от тов. Терегулова из Темясово, что Зайнуллин (командир повстанцев) прислал записку через агента, который ездил по вербовке повстанцев, я приказал немедленно его прислать в Баймак, как только он прибудет в Темясово. Зайнуллин не признавал моих приказов, гордился своими силами, которых он считывал около 3000 (три тысячи) человек. Послал ему записку Мурзабулатов, он ему ответил, что у него есть войска, что с ним нужно считаться, что он не такой, как тов. Мурзабулатов, поддавшийся под влияние Симонова – руссака и предателя Башкирии Муртазина. Словом написал грубости и глупости, тогда Мурзабулатов сделал ему официальное предписание через тов. Сафаргалина (бывший руководитель повстанцев), который и доставил его в Баймак. По прибытии в Баймак Зайнуллин продолжал держать себя повышенно, много грубил, не имея намерения подчиняться ни кому, тогда его пришлось арестовать, что и сделал тов. Мурзабулатов. Когда его направили арестованного в Темясово, он сделал покушение на побег и был пристрелен конвоем.

Этим и закончилась работа в Баймаке” (күрһәтелгән хисапнамә, л.8). Ә баяғы ете ялан командирына килгәндә, комбриг Симонов уларҙы, үҙтеләктән ҡорал һалып хөкүмәт яғына сығҡандарҙы, большевиктарса күҙ ҙә йоммай ялғанлап, “ҡулға алыныусылар” (йәғни ыристандар) тип тамғалай. Ләкин бит улар һуғышта алынған әсир ҙә, ыристан да түгел, сөнки уларҙы ихтилал етәксеһе Сөләймән Мырҙабулатов үҙе барып, Хөкүмәт менән ике-ара Килешеү нигеҙендә бөтәһенә амнистия иғлан ителеүен төшөндөртөп, Темәскә алып ҡайтҡан (баяғы хисапнамә, л.9 об.), шул Килешеүгә ярашлы артабан был командирҙар Эстәрлетамаҡта йыйылырға ла Ҡыҙыл Армия сафтарына ылығырға тейеш ине. Шуға күрә Темәс янындағы ҡанлы вәхшәт коммунистар режимы тарафынан ғәҙәти хәлгә әүерелдерелгән яуыздарса законһыҙлыҡ булып тора. Халыҡ батыры Хажиәхмәт Унасовҡа ла ошондай уҡ яҙмыш әҙерләнгәйне һәм уны, төндә кеше күрмәгән арала урманда юҡ итеү өсөн, Эстәрлетамаҡҡа йүнәлгән саналы колоннала Тәкәһуҡҡан ауылын ҡырынлатып уҙған оло юлдан алып китәләр...

Етмеш йыллыҡ совет осоронда ҡәтғи тыйылған һәм онотолоуға дусар ҡылынған батырҙың тормош юлын өйрәнеүҙә айырыуса фиҙакәрлек күрһәтеп, Фәтхиә Сәхиулла ҡыҙының, арымай-талмай, халыҡ араһынан йөрөп йыйған ярым легенда хәлендәге мәғлүмәттәре ҡыҙыҡлы, шуларҙың бер килкеһен иғтибарлайыҡ:

“**Өлкәндәр һөйләй:** Хажиәхмәт атта оҫта йөрөгән, мәргән атыусы, ә ҡиәфәте менән, Ласынов Фәтҡулла олатай әйтеүенсә, нәҡ Зәйнитдин (Хажиәхмәт менән бер туған Дауыттың ейәне) һымаҡ булған, мал-тыуары аҙ -- бер һыйыр, бер ат тотҡан. Һунарға йөрөргә яратҡан. Күктүбә яғындағы Ҡуштүбәлә әтрәт йыйған, тәүҙә -- 10, һуңынан 300-ләп атлы ғәскәре булған. Яуғастыла ятҡандар, аттарын ағаслыҡта бәйләп тотҡандар. Әсәһе – Сәбилә, атаһы – Хәбибулла (тарихсы М.М.Маннапов уның Ғәбиҙулла икәнен асыҡлаған. – Й.С.). Өй урыны Мостафин Камил өйөнөң урамында. Өйләнгән, балалары

булмаған. Гел һунарға йөрөнө, өйҙә торманы, тиҙәр. Ҡаҡса кәүҙәле, урта буйлы. Урман яғы кешеләре “Хажиәхмәт ҡараҡ” тиҙәр, әммә ауылға бер зыяны ла теймәгән. Кәрешкә ауылынан Кәрим (уның секретаре), Манһырҙан Дауыт, Сәхиулла, Күктүбәнән Ғиниәт, Ғибат, Хафиздар Хажиәхмәт менән бергә була... Күренекле ҡорҙаштарының береһе – Күктүбә ауылынан Мостафин Мотаһар Ғәлиәкбәр улы; шәжәрәһе буйынса, нәҫелдәре Бөрйән-бейгә барып тоташа: Тимерҡарабоға – Арышбай – Байышбаҡ – Бейеш-бей – Һараяҙ – Моңайтмаҫ – Йәнбил – Йосоп – Ибраһим – Мостафа – Ғәлиәкбәр – Мотаһар... Бейеш-бей Рәсәйҙең Ливон һуғышында ҡатнашҡан, 1610 йылда уға тархан исеме бирелгән. Мостафаның уландарынан Ғәлиәкбәр 1856 йылда имам дәрәжәһе алып, – Ибраһим ауылының (15 йорт), Ишмөхәмәт ауылының (54 йорт), Иҫәнгилде ауылының (122 йорт) имамы булған. Ғәлиәкбәрҙең уландары Мәхмүтйән, Фазылйән, Мотаһар; Мотаһарҙыҡылар Ғилметдин, Хәкимйән, Шакирйән, Сәлимйән. Шакирйәндең улы Юлай, ҡыҙҙары Сания, Суфия. Суфияның тормош иптәше Ғәлләмов Абдрахман (билдәле педагог-ғалим). Был ғаиләнән ике улан бар – Азамат, Салауат (икеһе лә ғилем эйәләре). Әле теркәлгән Мәхмүтйән, Фазылйән, Мотаһар -- өсөһө лә Хажиәхмәт Унасов ғәскәрендә әүҙем ҡатнашып һәләк булған.

Йәрмөхәмәтов Һөйөндөк ағай Һөйләй: Х.Унасов атылғас, уның көрәштәштәре, туғандары ла йәберләнә. Бер туған ҡустыһы Дауытты Хажиәхмәттең ҡоралын таптыртып ыҙалатҡандар; алып китәләр, бер йыл тирәһе ултыртып та ҡуялар. Эҙәрлекләүҙәрҙән биҙәрләп, Бөйөк Ватан һуғышы алдынан Ольховкаға күсеп китә, шунда үлә. Ул саҡта алтын йыуҙырыуҙағы мастер Ғөбәйҙуллин Фәйзулла был эҙәрләнеүсене, ярҙам йөҙөнән үҙ фамилияһына яҙҙыртып, эшкә ала, шул арҡала Ғөбәйҙуллиндар булып китәләр, хәҙер ҙә шулай йөрөйҙәр...

Ҡарамалы ауылынан Шәмсиғариф Янышев элек, колхоз заманында, Бөрйән районында Шүлгәнташҡа яҡын Ҡолғона

ауылында урман ҡырҡҡанда бер бабайҙа ятып эшләгән, исемен хәтерләмәй. Бабай һөйләгән, Хажиәхмәт ҡаҡшатты, тип. 120 һыбайлы әтрәте бар ине, аттарҙы тартып ала ла үҙҙәренең йонсоған аттарын ҡалдыра ла китә ине. Үҙе менән ҡатынын да алып йөрөнө, тигән.

Байыш ауылынан Әблүзина Менәүәрә (80 йәштә) әсәһе Хөббиниса һөйләгәнен иҫләй: Хажиәхмәттең төп төйәге Уҫаклы йыра. Сағылүҙәк, Ямаш – Сәғит аралығы аша Өскойоға тура юлы булды. Урыҫ малын ҡырҙы. Ҡыш көнө Ҡардаил яғынан береһенең, имеш, һыйырын етәкләп алып киткән. Һыйырҙың дүрт тояғына ла быйма кейҙергән. Артынан юллаһалар, бер һыйыр эҙе лә юҡ, гел быймалы кеше аяғы эҙҙәре, тип, был яҡка килмәгәндәр. Итен етешмәй йәшәгәндәргә (ярлы-ябағаға) өләшеп биргән...

Сырлыбаева-Әширова Фәүзиә Зекериә ҡыҙы (1933 йылғы) был ваҡиғаға бәйле әсәһенән ишеткәндәрен ошолай һөйләне: Зекериә, Хажиәхмәт, Камила һ.б. Ҡайынлы (Березовка) урыҫтарына ялланып иген урған. Эшләтһәләр ҙә, эш хаҡы (аҡса) түләмәйҙәр икән, ыҙғышып та йөрөгәндәр. Шуға күрә Хажиәхмәт берәүҙең һыйырын тояҡтарына быйма кейҙереп урлап киткән, Аҫылай түбәһендә һуйып, кешеләргә тараҡтан (эш хаҡы алмағандарғалыр?). Шулай бер ваҡыт Ҡайынлылағы Иван тигән берәүҙән эш хаҡына аҡса һораған. Урыҫтың ҡатыны уҫал (Айғыр мәрйә тип атағандар), ә Иваны йыуаш икән. Хажиәхмәт уларҙы уйынсыҡ пистолет менән ҡурҡытҡас, Иван ҡатынына, аҡса ҡәҙерлеме, әллә йәнеңме – бир! тигән, мәрйәһе йөн йомарлағы эсенә йәшергән аҡсаларын сығарып биргән...

Зекериә хәтерләгән: Хажиәхмәт һәр саҡ аты менән бергә булды, болалы йылдарҙа йә аҡтарҙан, йә ҡыҙылдарҙан ҡасып китергә һәр даим әҙер ине. Йоҡлағанда атының теҙгенен ҡулына урап ятты, атын юшатырға ебәргәндә лә теҙгенен биленән ысҡындырманы, тигән. Өйөндә йоҡламаны, ашарға әсәһенән ала ла ишек алдынан боролоп китә торғайны. Бер ваҡыт Улаҡ буйында дошмандарынан ҡасып барғанында утын

итеп өйөлгән сыбыҡ күбәһен күтәреп, шуның аҫтына инеп йәшеренеп ҡалған, быға уның йылғырлығы, йәтеш кәүҙәле булыуы ярҙам иткән.

Зекериә, ылаусы булып, ҡыҙылдарҙы обоз менән Кәрешкәгә алып киткән, шул саҡ уны Кәринкәнән аҡтар яғында (бәлки, автономия өсөн көрәшеүселәрҙер) булған Ғәлин Зекериә менән бутап, Руденконың һалдаттары ата яҙған. Бер һалдат: был оҙон, ҡаҡса -- теге Зекериә түгел, тип әйтеп өлгөрөүе арҡаһында атылмай ҡалған. Фәүзиә апай элек йырланған йырҙарҙы тоташ хәтерләмәй, ләкин ошондай юлдары бар ине, ти:

Красная Армия, марш кругом!
Хажиахмат-герой был батраком...

Йырланыҡ, ләкин мәғәнәһен белмәй инек, ти. Ул шулай уҡ уҡыған сағында Тажетдинов Нуретдин тигән уҡытыусының, һеҙ, байыштар, бандит тоҡомо кешеләре; Хажиәхмәт, Зәки Вәлиди – враги народа, тип әрләй торғайны. Уҡытыусы әйткәс, бала күңеле ҡабул ҡыла – дөрөҫ икән, тип, уларҙы халыҡ дошмандары икән тип уйлап тик йөрөнөм, ҡартайғанса, тип һөйләй.

Хажиәхмәт Аҫылай түбәһе менән Бүре ояһы тигән соҡорло аралыҡта ҡуйы селек араһында аты менән йәшенеп йөрөгән. Ул ер – ҡарап тороуға тип-тигеҙ, унда аты менән йәшеренер тип бер кем дә уйламаған, ти.

Ошо яҙылғандарҙың барыһын да Фәүзиә апай атаһы менән әсәһенән ишеткән, уларҙы беҙ ҡарыһҡыҙ, әкиәт итеп тыңлай торғайныҡ, тип хәтерләй”...

Ринат уҙаман Асылбаев ябҡаштары араһынан йөрөп йыйған мәғлүмәттәр ҙә халыҡ батырының юйылып бөтөп барған тәржемәи хәленә мөһим һыҙаттар өҫтәй:

“**Әблүтина Гөлниса апайҙан (Х.Унасовтың туғаны):** Хажиәхмәт батырҙың ырымы булған, тиҙәр. Йәғни эҙәрләүселәрҙән ҡасып мал һарайына инә лә юҡ була, имеш.

Әтрәте менән китеп барғанында аҙ ғына йоҡлап ала ла икән, тегеләр (дошмандары) был яҡтан баҫтырып килә, тип, икенсе тарафҡа алып китә. Ауылда бер бешкән ашты ике тапҡыр ашай торған булғандар, йәғни былар ашарға ултырғас, тегеләр быларҙы этеп сығаралар икән һәм, яңынан төркөмләнеп, дошмандарын дөрөп сығарып, тағы ла ашарға ултыралар.

Байыштан бик алыҫ түгел Баймырҙа ауылында ҡырғынсылар менән һуғыш була, ауылдар аша үткәнендә Хажиәхмәт ихтилалсыларҙы дүрт рәткә теҙгән, ә халыҡ уларҙың аттарын ҡыҙыл таҫмалпар менән биҙәгән. 1920 йылдың йәй баштарында Сарабил урыҫтары ауыл халҡының ат өйөрөн алып киткәс, Х.Унасов кире ҡайтарыуҙы ойоштора, был ваҡиғалар өсөн уны Темәскә алып китеп төрмәгә ябалар, ләкин ул дүрт-биш ыристан иптәше ярҙамында төрмәнең бер мөйөшөн ҡуптарып, ҡораллы бер милиционер менән бергә ҡасалар, был төрмәне яңыраҡ ҡына һүтеп алдылар. Бына ошо ваҡиғанан һуң Ш.Хоҙайбирҙин ярҙамында Х.Унасовҡа “ат ҡарағы” тигән исем тағыла. Ә ҡулға алыныу тарихы былай: ул барып йөрөгән бер ҡатынды алдан иҫкәртәләр, әгәр ул килһә, еҙ тасты өй нигеҙенә һөйәп ҡуйырға, тип, һәм теге ҡатын шулай итә лә...

Мәтинов Абдулхаҡ бабайҙан: Урал йылғаһы буйында урынлашҡан Уртазымка тигән станицаның сиркәүен талай, быны баҫтыралар, Күктүбә (икенсе исеме Ибраһим, хәҙер ул юҡ) тигән ауыл эргәһендә селеклек араһына инеп китә лә юҡ була, тота алмайҙар – ырымы булған, тиҙәр. Әтрәт эре хәрби операциялар үткәргән саҡта өс йөҙләп кешегә еткән, алда-артта берәр пулемет булған, әтрәттең военно-полевой судының рәйесе итеп Күктүбә ауылынан сыҡҡан Мостафин Мотаһар тигән кеше ҡуйыла, был мәғлүмәтте миңә уның улы Мостафин Шакир ағай Баймаҡта бирҙе, ул уҡытыусы ине.

1930 йылдар тирәһендә Х.Унасовтың бер туған ҡустыһы ниндәйҙер йомош менән Богачевка ауылына барғанында уны шунда урыҫтар йыртҡыстарса туҡмап үлтерә.

Төп Юлыҡ ауылы кешеһе Әҙеһәмов Г. һөйләүенсә, ошо ауылда ихтилалға тиклем Х.Унасов тире эшкәртеү заводында эшсе була. Әҙеһәмов 101 йәшкә етеп, 1981 йылда вафат, минең Х.Унасов тураһындағы һорауҙарға ошолай яуаплай ине. Х.Унасов ихтилалға тиклем беҙҙең ауылда күн заводында тире иләүсе булып эшләне, насар кеше түгел ине, дезертирҙарға (баш күтәреүселәргә) ҡушылып китеп һәләк булды, әллә нисек итеп әтрәтенә халыҡты йыйып алып китте...

Баш күтәреүселәр менән тәүге осрашыуын ошолай хәтерләй: Баймаҡтан бер иптәш менән ҡайтышлай I Этҡол үренә артыла башлағайныҡ, Буранбай ауылы яғынан 15-ләгән ҡораллы һыбай күренде, бөтәһе лә ҡыҙыл әрмис кейемендә ине. Кинәт һауаға 1-2 тапҡыр атып ебәргәйнеләр, ҡот осто һәм беҙ ҡаса -- арбаға аяғүрә баҫып атты ҡыуа башланыҡ, арт яҡтан һәленгән күлдәктең елгә елберләүе генә тойомлана, арба тәгәрмәстәре ағас төптәренә әләгеп сирғый... Хәҙерге лесничество яғындағы яландан, һауаға ата-ата, “Он (мука)!” тип ҡыскырып килеп инерҙәр ине... Беҙ уларҙы еңәбеҙ, тип йөрөнөләр ҙә, үҙҙәре ҡапыл еңелде лә ҡуйҙылар, сәбәбе – күпселеге советтар яғына сығып бөттө... Хажиәхмәттең, һаҡсыллыҡ маҡсатында, “Хәжәкә” тигән ялған исеме була (Ш. Хоҙайбирҙин да “Хажи” тип кенә йөрөтә), полный хәрби кейемдә, билендә ҡылыс, ике яғында ла маузер, коммерсанттарҙың лавкаһына аяғүрә баҫып, йоҙроҡтарын төйөп, телмәр тотор булған, обоздарында тулы комплектлы ҡыҙыл әрмис обмундированиеһы йөрөткән: кем уларға ҡушыла – баштан-аяҡ кейендерткән.

Бер ваҡыт ихтилалсылар әтрәте ауылда саҡта ҡырғынсылар ауылды уратып ала, ҡаты һуғыш була, унасовсылар пулемет менән мәсет манараһынан һиптерә. Ҡыҙыл ҡырғынсылар араһында мадъярҙар була (беренсе донъя һуғышында әсир төшкән венгрҙар, Әҙеһәмов Г. уларҙы маджарлар тип йөрөтә һәм бигерәк ҡаты бәғерле, рәхимһеҙ булыуҙарын иҫкә ала ине). Шулар мәсеттең айын атып төшөрә һәм мәсет 70 йыл буйы айһыҙ тора. Ихтилалсыларҙың Шүлкә

ауылы эргәһендә (Ҡана яғы) һәләкәткә осрауын, ҡырылыуҙарын, 1921 йылда ауылға Охранюк-Черский – Амантаев – Мәғәсүмов әтрәтенең килеүен, ә Амантаевты “ҡырғыҙ кешеһе” тип асыҡ һөйләй ине”...

Йәштән үк тыуған ер тарихы менән нығ ҡыҙыҡһынған, “эҙәрмәнлек ене ҡағылған” Ринат Миҙхәт улы ауылдарҙа һорашып йөрөп йыйған һуғыш эпизодтары ла ҡыҙыҡлы:

“Ул ваҡыттағы Баймаҡ заводы Поленов – Руденколарҙың ҡан ҡойоу “эш”ендәге төп базаһына әйләнә, тирә-яҡтан шпионлыҡта нахаҡ ғәйепләнеп ҡулға алынған башҡорттарҙы ошонда алып килеп, вәхшиҙәрсә язалап үлтереп, шахтаға (хәҙерге ҡала идаралығы эргәһендә) быраҡтыралар. Поленов штабы хәҙерге Азанов урамындағы ҡыҙыл кирбес магазинға ҡаршы бәләкәй йортта урынлашҡан була, бында шулай уҡ һуғышта әсир алынған полевой командир Г.Ырыҫбаев та язалап үлтерелә һәм шул шахтаға ырғытыла.

1920 йылдың октябрь аҙаҡтарында Х.Унасов Баймаҡҡа һөжүм әҙерләй, төп көстәре Моҫтай, Атанғол, Басай ауылдарында була. Моҫтай ауылы старостаһы һәр өйҙән хәрби аттарҙы ашатырға бесән бүлергә ҡуша, шул йәһәттән Г.Әлмөхәмәтов өйөнә өс һыбайлы ебәрелә. Бесән тейәгәндәрен тәҙрәнән күҙәтеп ултырған Әлмөхәмәтов түҙә алмай – минең бесәнде саманан тыш күп алаһығыҙ, тип, йөк башында торған ихтилалсыларҙы осора һуғып төшөрә лә ағаслыҡ араһына ҡаса. Был хәлде шул уҡ минутта Х.Унасовҡа еткерәләр, ул ҡыҙып китә: “Ниңә ул кешегә ҡул күтәрергә, был эште бында ла хәл итергә була ине бит!” – тип, тегене хәҙер үк табып килтерергә бойора. Был эпизод Х.Унасовтың халыҡты йәберләмәҫкә тырышыуын күрһәтә.

Баймаҡ һуғышында төрлө йәштәге кешеләр ҡатнаша, ихтилалсылар хәҙерге Әлибаев урамындағы күпер аша Поленов штабы яғына бәреп керәләр, алыш башлана, 75-77 йәштәрҙәге мыҡты кәүҙәле бер ҡарт суҡмар менән ишектәрҙе емерә һуғып йөрөй һәм шунда һәләк була. Һуғыш бөткәс, поленовсылар уның мәйетен һуҙып һалып, ҡулына суҡмарын

тотторо п, “башкирский богатырь, хэ!” тип мәсхәрә ҡылалар. Тау битенән яуҙырылған көслө утҡа түҙә алмай, унасовсылар сигенә, ҡайһы берҙәрен 4-5 винтовка йөкмәп күперҙән сыҡҡанда атып үлтерәләр – тәүҙә аттарын йыға аталар, аҙаҡ үҙҙәрен. Бер атҡа ейәне менән менгәшеп килгән бабайҙы ла атып төшөрәләр, ауылға ҡайтҡас, оләсәһе ейәненән һорай икән – ҡайҙа олатайың, тип. Ул ҡапыл аттан ҡоланы ла ҡуйҙы, мин ҡалдым, тип әйтә икән ейәне...

Баймаҡтан һуң унасовсылар Конезаводтың тире эшкәртеү заводын туҙҙыра, һәр бер ихтилалсы эйәренең артына иләнгән тиреләр төргәге бәйләп ала. Шунан һуң Унасов Темәскә бәреп инә, почта, ауыл советы һымаҡ учреждениелар тар-мар ҡылына, был эштәр “халыҡ Центрҙың сәйәсәтенә ризаһыҙлыҡ белдерә” тигәнде юғарыға еткереү маҡсатында эшләнә. Бер бабайҙың һөйләүе буйынса, шул көндәрҙә ҡырпаҡ ҡар яуған, Темәс урамдарына тулған ихтилалсыларҙың ҡара себендәй ябырылыуынан хатта аҡ ҡар ҙа күренмәй икән. Хажиәхмәт, иртәгә Преображенды (Йылайырҙы) алабыҙ, тип, әтрәтен урау юлдан Ирәндек аша алып китә...

Моҫтай ауылы Ирәндек тауының һөҙәгерәк көнсығыш битләүендә, Темәс – Түбә -- Ҡыҙыл юлы буйында урынлашҡан ике магазинлы ауыл.

Мин, хәрби хеҙмәтемдән һуң, 1972-73 йылдарҙа Сибай урмансылығында техник булып эшләгәндә I Төркмән ауылынан Ирәндек буйындағы ауылдарҙағы урмансыларға ҡыш көндәре һунар саңғыһында йөрөй торғайным. Моҫтай ауылында төшкө сәй мәлендә ошондағы һуғыш тураһында әңгәмәләшеү булды һәм мине шул ваҡиғаларҙың тере шаһиты Мирзиян бабайҙың өйөнә алып киттеләр, бына уның һөйләгәндәре:

Ауылда ҡыҙыу рәүештә һуғышҡа әҙерлек башлана, Х.Унасов иң тәүҙә бөтә ауыл халҡын йылға буйындағы ағаслыҡ араһына күсерә; үҙе килеп, беҙ тыныс халыҡты рәнйетмәйбеҙ, һеҙҙе яҡлайбыҙ – ҡырғынсылар менән генә көрәшәбеҙ, тип тынысландырып китә. Күп тә үтмәй, Түбә яғынан ауылға ҡыҙылдар килеп керә, ихтилалсылар уларҙы ҡойма, ҡапҡа

арттарынан, өй ҡыйыҡтарынан атып ҡыра башлай, әммә тегеләрҙең пулеметы тау башынан ауылға ут яуҙыра. Ошо хәл иткес мәлдә Х.Унасов шәхси батырлыҡ күрһәтә: арт яҡтан шыуышып барып пулеметты граната бәреп тонсоҡтора. Ҡырғынсыларҙың бер төркөмө, тәртипһеҙ ҡасып, буш өйҙәрҙең иҙән аҫтарына йәшеренгәс, унасовсылар уларҙы, һөйрәп сығарып, башҡа әсирҙәр менән бергә боғаҙҙарынан салып үлтерәләр, бындай язалар хәрби-ялан суды ҡарары менән башҡарыла. Әтрәт, Ҡыҙыл яҡтарына юҫыҡланып, Әбйәлил тарафына юлланғас, Поленовтың Баймаҡтан ҡуҙғалған ҡырғынсылары тура юлдан Ғәли, Сибай һәм башҡа ауылдырҙы ҡанға батырып Моҫтай ауылына килә, ауылды талайҙар, бер-нисә көтөүсене, шпионлыҡта ғәйепләп, тураҡлап ташлайҙар...

Миңә производство практикаһын 1968 йылда Әбйәлил урман хужалығында үтергә тура килде, һуңыраҡ ул Баймаҡ урман хужалығы берекмәһенә ҡушылғас, 1978-86 йылдарҙа эшем буйынса ул урмандарҙы арҡыры-буй үтеп сыҡтым; байтаҡ өлкән быуын кешеләре менән осрашыуҙарҙа иҫтәлектәрен тыңланым, улар түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала.

Баш күтәреүселәрҙең етәксеһе С.Ш.Мырҙабулатов ултырған төп штаб хәҙерге Әбйәлил районында Ҡырҡты тауындағы Тарлауыҡ (“Ущелье”) тип йөрөтөлгән ҡаялыҡтағы мәмерйәлә була (өлкәндәр, фәҡәт шул урында ғына шыршы ағасы үҫә, тип аңғарттылар). Мәмерйә алдан табып әҙерләп ҡуйыла, сөнки бәйләнеш өсөн Белорет, Усалы, Баймаҡ яҡтары, ҡаҙаҡ далалары яҡын. Оморҙаҡ исемле бабай һөйләүенсә, ихтилал башланыр алдынан Х.Унасов Мерәҫ ауылынан 8-9 йәшлек бер малайҙы арбаға ултыртып (күҙ яҙлыҡтырыу өсөндөр инде), Әбйәлил яғына сәфәр ҡыла – шул мәмерйәләге штабҡа, тип фаразлайыҡ. Ихтилалсыларҙың ялан командиры, беренсе донъя һуғышынан унтер-офицер дәрәжәһендә ҡайтҡан Ф.Юламановтың туғаны Г.Юламанов (мулла) шул штабҡа барғанында Амангилде ауылы эргәһендә һәләк була, ҡырғынсылар (улар араһында киләсәктә Әбйәлил райсоветы

рәйесе буласаҡ Ғөбәйҙуллин тигән кеше лә йөрөй, аҙаҡ утыҙынсы йылдар репрессияһында уның үҙенең дә башына етәләр) уның арбаһынан 4-5 винтовка, ат ялына үрелгән револьверҙар һәм, иң мөһиме, штабҡа йүнәлтелгән хат табып ала. Хәҙрәт язалана, уны ауыл халҡы зиратҡа ерләй; был турала ишеткән ауылдаштары, төндә кәүҙәһен ҡәберҙән ҡаҙып алып, Билал ауылы зиратына ҡайтарып ҡуялар.

Х.Унасов, Зәйнуллин етәкселегендәге әтрәткә төп штабтан хәрби бурыс йөкмәтелә: эре хәрби операциялар үткәреү өсөн, Усалы яҡтарында хәрәкәт итеүсе Ф. Мәғәсүмовҡа ҡушылырға.

17.01.1921 йылда Х.Ғ.Унасов үлтерелгән урында һулдан уңға: Р.М.Асылбаев, Ф.Һ.Аҡҡужин, Н.Н.Ҡолһарин, Т.Ә.Солтанов. 2010

Был осорҙа әтрәттең үҙенең дә хәрби операциялар үткәреү өсөн штабы һәм штаб башлығы булған тип раҫларға беҙҙең заманда бухгалтер булып эшләгән Ф.Ҡулаев тигән кешенең иҫтәлеге ярҙам итә. Ҡулаев ағай 1960-ынсы йылдарҙа бер улын уҡытырға алып барғанында Силәбе өлкәһе Ҡуса тирәһендә поезда башы таҡыр итеп ҡырылған, төптән үҫкән киң яурынлы, френч кейгән урыҫ ҡартын осрата. Ул Ҡулаевтың Баймаҡтан икәнен белгәс, Хажиәхмәт Унасовты ишеткәнегеҙ бармы, мин уның әтрәтендә штаб начальнигы булдым, тигән хәбәр бирә. Ҡулаев ныҡ шөрләүе арҡаһында, бер нимә лә

белмәйем, тип яуаплай, тегенең исем-фамилияһын һорарға ла батырсылыҡ итмәй – ҡиммәтле мәғлүмәт юғала...

Х.Унасов әтрәтенең баяғы Усалы тарафына хәрби сәфәренә әйләнеп ҡайтһаҡ, баш күтәреүҙе баҫтырыу өсөн Польша фронтынан саҡыртылған Муса Мортазин, ике ғәскәрҙең ҡушылыуын булдыртмаҫ өсөн, Х.Унасов әтрәтенә ҡаршы сыға, уға ярҙамға Белореттан Плашкин етәкселегендә пулеметлы бер рота ебәрелә. Октябрь аҙаҡтарында хәҙерге Әбйәлил районында барған һуғыштар Күсем ауылы эргәһендә тамамлана. Күсем ауылы яғында позиция биләгән Зәйнуллин – Унасов әтрәтенә ҡаршы М.Мортазин Ҡарабалыҡ, Сабаҡлы, Мауыҙҙы күлдәре араһындағы ҡамышлыҡтан, ә Плашкин ротаһы – Ҡырҡты тауы яғынан һөжүм итәләр; унасовсылар Ҡырҡты тауының көнбайышындағы Салауат утарына (хәҙерге Яҡтыкүл санаторийы эргәһендә) сигенә. М.Мортазин белореттар ярҙамында унасовсыларҙы ҡыҫырыҡлаһа ла, еңә алмай – быны киләсәккә ҡалдыра...

Инде килеп әлегәсә сиселмәгән, Хажиәхмәт батырҙы тәғәйен кем һәм нисек үлтерҙе икән, тигән тарихи йомаҡты ла һүтәйек, әлеге лә баяғы шул Тәлғәт Әхтәм улының һәм Ринат Миҙхәт улының арымаҫ-талмаҫ эҙәрмәнлектәре арҡаһында ирешелде быға ла.

1921 йылдың 17 ғинуарында (был датаны ҡырғынсы Г.И.Симонов теркәп ҡалдырған) Тәкәһуҡҡан ауылы төбәгендә булған ошо ҡанлы ваҡиға тураһында төрлө кешеләр тарафынан буталсыҡ һәм ҡаршылыҡлы фекерҙәр яҙып ҡалдырылыуын хәбәр иткәйнек инде – уларына туҡталып тормай, урыҫтар әйтмешләй, башбирмәҫ “үгеҙҙе мөгөҙөнән алайыҡ”.

Г.И.Симоновтың 1921 йылдың 31 ғинуарында Эстәрлетамаҡта яҙған хисапнамәһендә: “В пути следования между деревней 2-ой Иткуловой и Кано-Никольским заводом Унасов пытался сделать побег, пользуясь ночной темнотой и бурей, но Сагитовым был зарублен в лесу”, – тип әйтелә (ЦГАОО РБ, ф.22, оп.5, д.17, л.10). “Зарублен” тигәне – ҡылыс

менән тураҡлап ташланған, тимәк; ләкин был тоташлай ялған, сөнки халыҡ батырының яҙғыһын ер ҡарҙан асыла башлағас табылған кәүҙәһе һис тә тураҡланмаған, ә атып үлтерелгәнлеге һәм, үлеме ышаныслы булһын өсөндөр, аткандан һуң боғаҙынан салынғанлығы асыҡлана; был һаҡсыллыҡ милиционерға юғарынан бойоролоу буйынса үтәлгәндер, сөнки бер көн элек кенә Симонов үлтерткән Чирковтың үлмәй ҡалыуы фашланып, нығ аймылыш ҡылған бит... Тимәк, Х.Унасов һис тә үҙе теләп ҡасып барғанында түгел, ә махсус рәүештә ойошторолоп үлтерелә, был ҡанлы эш Ҡаназавод оло юлына (ул Темәстән Иҙрис, Муллаҡай, Ҡолсора, Байым, Эткол ауылдары аша һуҙылған) Тәкәһуҡҡан ауыл юлы килеп ҡушылған тәңгәлде саҡ ҡына үтеп киткәс, һул яҡлап ағас араһында ҡараҡтарса башҡарыла. Был хаҡта Р.М.Асылбаев биргән мәғлүмәт:

“Минең менән бергә 1980 йылдарҙа бергә эшләгән өлкән инженер А.М.Ҡәйепҡолов яҡшы белеп һөйләүенсә, яҙ көнө юл буйында Х.Унасов кәүҙәһе табылыу тураһында хәбәр ишетелгәс, тирә-яҡ яҡын ауылдарҙан аҡһаҡалдар йыйыла, сөнки батырҙың абруйы юғары була; ул ергә Ҡәйепҡоловтың атаһы ла бара һәм өйгә ҡайтып һөйләй: “Беҙ барып еткәндә байтаҡ кеше, юл буйына һибелеп, нимәлер ҡарай ине; мәйеткә япҡан толопто асып күрһәттеләр, тамағы салынған, ә башындағы ҡолаҡсыны бер ситтәрәк ята ине”...

1987 йылда Баймаҡ урман хужалығы Ҡана яғындараҡ урман эштәре буйынса семинар үткәрҙе, юл Тәкәһуҡҡан тәңгәленән уҙғанда ул (А.М.Ҡәйепҡолов), машинаны туҡтатып, Хажиәхмәт Унасовтың һәләк булған урынын күрһәтте”...

Бөтә мәғлүмәттәр шундай һығымтаға килтерә: халыҡ батыры Х.Ғ.Унасов комбриг Симонов әмере буйынса үлтерелгән, ә был ҡанлы бурыс уға, йәшерен рәүештә, шул саҡтағы юғары хакимиәт тарафынан йөкмәтелгән. Йәшерен приговорҙы үҙ ҡулы менән башҡарыусының кемлеге лә сер булыуҙан туҡтаны, алдымда ята мөһим ҡағыҙ -- Т.Ә.Солтанов үҙе барып яҙып алған мәғлүмәтнамә:

“2009 йылдың 22 ноябрендә Баймаҡ ҡалаһында 85 йәшлек Вара ағай Буранбаевта булдым, ул Хажиәхмәт Унасовты Байрамғолов (?) Фәруҡ үлтергән, улар, өс милиционер, Х.Унасовты Эстәрлетамаҡҡа оҙатып барырға тейеш булғандар.

Фәруҡ Х.Унасовҡа үс тоткан – уның яратҡан ҡыҙын Х.Унасов ҡасырып алып киткән булған. Юлда барышлай милиционер Фәруҡ Х.Унасовҡа: “Төш сананан, атла ситкә!” – тигән; 30-40 аҙым киткәс аткан. Ҡортүлгән ауылынан пүнәтәйҙәр саҡырып килтереп акт төҙөгәндәр, ҡасып барғанында атылды, тип”...

Һәм бына Т.Ә.Солтановтың йәнә лә бер эҙәрмәнлек һөҙөмтәһе:

“Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылында Аблаева Яңылбикә Фәруҡ ҡыҙы һеңлеһе Рауза мәрхүмәнең 1958 йылғы ҡыҙы Юнысова Миңһылыуҙа йәшәй, әммә атаһы Фәруҡ һәм Х.Унасов тураһында һөйләмәй: “Ҡуркам, 1973 йыл Силәбе өлкәһе Ҡыҙыл районында йәшәгәнемдә ике кеше, һин Хажиәхмәт Унасовтың ҡыҙы икән, үлтерәбеҙ, тип килгәйне, ирем Аблаев Әхмәҙиә, ул нишләп Хажиәхмәт Унасовтың ҡыҙы булһын – тыуған йылы 1928 бит, тигәс, киттеләр”, -- ти ине. Һуңғы ваҡытта уны Күлтабан ауылындағы (Сибайҙан 10 километр) улы Аблаев Айратҡа килтергәндәрен ишетеп, йәнә барып ҡайттым, уртаҡ тел дә табылды.

Тәкәһуҡҡан ауыл зыяраты. 2010

Яңылбикә апайҙың күҙҙәре күрмәй, әммә хәтере бик һәйбәт. “Атайымдың һөйләгәненән шул иҫемдә ҡалған, -- ти: -- Эстәрлегә оҙата барырға сығтыҡ, өс сана ине, милиционерҙар бар. Х.Унасов йәйәү атлай, эргәһендә атайым һыбай, тәмәке тарталар. Х.Унасов әйтә, ағай, һин мине ошонда үлтер ҙә ҡуй инде, Эстәрлегә барып етһәк, бик ыҙалатырҙар, ти икән. Фәруҡ: ҡустым, бик йәлләйем бит, ҡулым күтәрелмәй, тигән. Х.Унасов бик үтенгәс, ҡас әләйһә, тигән Фәруҡ һәм һауаға ике тапҡыр атҡан. Унасов ҡаса башлаған. Фәруҡҡа иптәштәре, нишләп ебәрәһең -- ат, тигәс, атып үлтергән”...

Ҡабатлап һораным Яңылбикә апайҙан, атайың үҙе һөйләнеме, тип. Эйе, өйҙә ирҙәргә һөйләгәнен үҙ ҡолағым менән ишеттем, тине”.

Батырҙың ҡайҙа ерләнгәне билдәһеҙ ҡала һаман (был йәһәттән эҙләнеү дауам итә); әммә иң яҡын урынға – Тәкәһуҡҡан ауыл зыяратына ҡуйылғандыр, моғайын...

Тик шуныһы: Х.Унасовтың, Эстәрлетамаҡҡа барып етергә теләмәй, милиционерҙан әжәл үтенеүе шикләндерә. Сая рухлы был әҙәм, әгәр ҙә яманлыҡ эшләрҙәр тип шикләнһә, ҡорҙаштары Фәтҡулла Мәғәсүмов һәм башҡалар кеүек үк, көрәште дауам итергә үҙенең төйәгендә ҡалыр ине.

Йәнә Т.Ә.Солтановтың яҙмаһына күсәйек: “Яңылбикәнең атаһы Сәйетбатталов Фәрүк Ҡотлоәхмәт улы 1886 йылғы (апай ышаныслы әйтә), Баймаҡ районы Байрамғол ауылында тыуған, Бөйөк Ватан һуғышына тиклем милиционер булып эшләгән, фин һуғышында ҡатнашҡан. 1942 йылдың 22 октябрендә үҙе теләп фронтҡа киткән (халыҡты ыҙалатып ҡыуып йөрөү йәнгә тейҙе, ҡыҙғанам, һуғышҡа киткәнем яҡшы, тигән). 1945 йыл Баймаҡ районы Күктүбә ауылына ҡайтып, ат ҡараусы булып эшләп, 1957 йылда вафат”. Фамилия мәсьәләһенә килгәндә, уның Вара Буранбаев белгән Байрамғолов фамилияһы ауылға исем биреүсе Байрамғоловтар нәҫеленән икәнлеген күрһәтә, Сәйетбатталов фамилияһын ул һуңынан алғанға оҡшай (фамилия үҙгәртеү киң таралған).

“Яңылбикә апай, -- тип дауамлай Т.Ә.Солтанов, -- ”Атай әсәйемде Хажиәхмәт-бандиттың бисәһе!” – тип туҡмай торғайны, тип хәтерләй. Әсәһе Ғафарова Гөлзифа Әптелғафар ҡыҙы 1901 йыл Әбйәлил районы Юлдаш ауылында тыуған. Апай иҫләй: “Әсәйемде тәүге иренә биргәс, йәшәмәй ҙә ҡасып ҡайтҡан (бик һылыу булған). Икенсе иренең Гөлнур тигән һеңлеһен Х.Унасов һоратҡан – бирмәгәндәр. Әсәһе шул ире менән мунса төшөп ултырһалар, ауылды бандиттар баҫты, тигән тауышҡа мунсанан сығып, һарай башына менеп маташҡанда Х.Унасов уның ирен биле тапҡырынан ҡылыс менән өҙә саба, Гөлзифаны ҡатыны итеп Байышҡа алып китә. Аҙна-ун көндән Байышҡа ҡыҙылдар килгән, Гөлзифа ҡайтып киткән. Х.Унасов уны тағы барып алған”...

Һәр хәлдә, тарихи йомаҡ сиселде, һорау урынына нөктә ҡуйылды.

06.10.2010

Йөкмәткеһе

БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

Хажиәхмәт батыр.....3

ИКЕНСЕ БҮЛЕК

Ҡанлы йылдар юлынан.....26

Документально публицистическое издание

Султанов Зигат Адигамович

ХАЖИАХМАТ БАТЫР. КРОВАВЫЕ ГОДЫ

Печатается в авторской редакции

На башкирском языке

Солтанов Йыһат

ХАЖИӘХМӘТ БАТЫР. ҠАНЛЫ ЙЫЛДАР



Солтанов Йыһат Әҙеһәм улы 1932 йылдың 3 декабрендә Башҡорт АССР-ың Йәнсура районы Ырыҫкол ауыл советы Сәнкем-Биктимер ауылында тыуған (аҙаҡ был ауыл күрше Һунарсыға күсеп ултыра), хәҙер ул ерҙәр Ырымбур өлкәһенең Һарыкташ районында. Колхозда төрлө ҡара эштәрҙә йөрөй, 1950 – 1956 йылдарҙа ике Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Балтик хәрби-диңгеҙ флотының мина тралщигында хеҙмәт итә, диңгеҙ юлдарын Бөйөк Ватан һуғышынан ҡалған миналарҙан таҙартыуҙа ҡатнаша. 1965 – 1986 йылдарҙа Өфө ҡалаһында “Һәнәк”, “Башҡортостан ҡыҙы”, “Ағиҙел” журналдарында эшләй.

Яҙыусы-тарихсы Йыһат Солтановтың ун дүрт (14) томлыҡ Әҫәрҙәр йыйылмаһы З.Биишева исемендәге Башҡортостан дәүләт “Китап” нәшриәтендә китап булып донъяға сығыу өсөн интегеп сират көтә. Ижады менән интернет аша танышырға теләүселәр өсөн сайтының адресы зигатсултанов.рф тип яҙыла.